✓ *Ата ла ул, әсә лә ул - ерең һаҡла,*
*Баҙар хаҡы текә тиеп, уны һатма,*
*Ерең булһа, балаларың күрмәҫ нужа,*
*Сабыр бул һин һәм бул һин хужа.*

**Рөстәм НУРЫЕВ.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1 - 7 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№35 (505)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Иң баллы төбәктең...**

иң баллы йәрминкәһе



5-6

**Башҡортомдан батыр юҡ икән...**



7

**Башҡорт мәғрифәтселеге...**



8-9 Ул - Аллаһы Тәғәләгә инаныл, милләтте яҡлау һәм һаҡлау институты

**Заманмы ғәйепле, әллә үҙебеҙме?**



12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мәғариф өлкәһендәге реформаларҙың кайһылары менән килешәһегеҙ, кайһылары менән риза түгелһегеҙ?

***Рауил БИКБАЕВ, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитеты рәйесе:*** Мәғариф - ул халыҡ тормошонда иң мөһим тармаҡ. Төрлө байрамдар бар, улар араһында һәр беребеҙ 1 сентябрҙе иң ҙур байрам, иң ҙур ваҡиға тип иҫәпләй, сөнки ауылың да, ҡалаң да, республика ла, дәүләт тә, бөгөнгө лә, киләсәк тә мәктәптән башлана. Беҙҙең өсөн, бөгөнгө көн өсөн мәғариф бик мөһим тармаҡ, сөнки йәштәр йылдан-йыл китаптан айырыла бара, телдән, йолаларҙан ситләшә - былар кисекмәҫтән сара күреүҙе талап иткән хафалы мәсьәләләр. Һуңғы йылдарҙа мәғарифта барған реформаларҙың, тәжрибәләрҙең күбеһе бөтөнләй кәрәкмәй. Бөтөн донъяға танылған данлыҡлы мәғариф системаһынан баш тартып, һуҡыр рәүештә көнбайышҡа эйәреү һөҙөмтәһендә матур традицияларҙы юғалтабыҙ. Милли-төбәк компоненты белем биреү стандарттарынан алып ташланды, хәҙер беҙгә милли әҙәбиәтте, телде, тарихты яңы быуынға өйрәтеүе еңел булмаясаҡ. Яңы стандарттар уларҙы уҡытыуҙы тыймай, шулай ҙа күп нәмә мәктәп директорҙарынан, етәкселәрҙән тора. Ә уларҙың күптәре был мәсьәләгә битараф ҡына түгел, хатта ҡаршы, тиергә мөмкин. Был осраҡта, әлбиттә, ата-әсәләргә лә, йәмәғәтселеккә лә әүҙемлек бурысы йөкмәтелә. Милләт киләсәге хәл ителгәндә, мәктәп реформаларынан улар ситтә ҡалырға тейеш түгел.

Беҙ бөгөн күп зарланабыҙ һәм дөрөҫ зарланабыҙ, ләкин булғанды ла ҡәҙерләй белергә кәрәк. Элегерәк замандарҙа Өфөлә башҡортса һөйләшкәнде, сәхнәнән сығып шиғыр уҡығанды, йыр йырлағанды ғына түгел, урамда үҙ-ара туған телендә һөйләшкән кешеләрҙе лә һирәк осрата инек. Хәҙер бит башҡортса шиғыр һөйләмәгән, йыр йырламаған мәктәп юҡ. Башҡорт телен дәүләт теле итеп ҡабул итеү - ул шулай уҡ ҙур ҡаҙаныш, ҙур уңыш, алға китеш, әммә был ҡаҙаныштарҙы беҙ юғалтмаҫҡа тейешбеҙ.

Бөгөн һәләтле балалар тураһында күп һөйләшәбеҙ. Хәҙер йәштәр күпләп сит ҡалаларға, сит илгә уҡырға китә, бер яҡтан, был һәйбәт, тик уларҙың күбеһе республикаға әйләнеп ҡайтмай. Шуға ла беҙҙең алда, таланттарыбыҙҙы кем өсөн үҫтерәбеҙ, тигән мәсьәлә лә торорға тейеш. Һәләтле йәштәрҙе үҫтереү генә түгел, уларҙы һаҡлай белергә, республикаға хеҙмәт иттерерлек итеп тәрбиәләргә лә кәрәк.

Быйылғы уҡыу йылынан "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика" фәне индерелә. Дин мәҙәниәтен уҡытыу, бәлки, һәйбәт эштер, әммә уның үҙенең ауырлыҡтары бар. Кем уҡытасаҡ уны, ҡайҙа был предмет буйынса дәреслектәр? Мин был дәресте тарих дәресе иҫәбенә уҡытыуҙы тәҡдим итер инем, ул саҡта уҡытыусы мәсьәләһе лә үҙенән-үҙе хәл ителер ине. Ауыл шарттарында был предметты индереүҙе еңел хәл итерҙәр ҙә, ҡалала бер синыфта күп төрлө милләт балалары ултыра, был үҙенә күрә ҡаршылыҡтар тыуҙырыуы ихтимал.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫ МЕНӘН!

# КИЛӘСӘККӘ АСҠЫС - ӘСӘ ТЕЛЕ

*Әсә теле -*
*бала саҡта ғына*
*Тапшырыла торған*
*асҡыстыр.*
*Ошо асҡыс барҙа,*
*үткәндәргә,*
*Киләсәккә*
*ҡапҡа асыҡтыр.*

*Әсә телен белеү -*
*бар донъяны*
*Туған телдә*
*танып белеүҙә!*
*Әсә телен һөйөү -*
*хистәр ташһа,*
*Уйҙар аҡһа*
*туған телеңдә!*

**Мөнир ИҠСАНОВ.**



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЯБАЙ ҒЫНА ШӨҒӨЛ,

## әммә аҡса килтерә



**Һәр кемдең тормошонда мәңгелеккә иҫтә ҡалырлыҡ ваҡиғалар була. Шуларҙың береһе - туй тантанаһы. Был ғүмер байрамын һәр кем матур һәм күркәм итеп үткәрергә тырыша һәм бының өсөн төрлө саралар эҙләй.**

Бөгөнгө көндә тантана үтәсәк залды төрлөсә биҙәү менән бер рәттән, йәштәр рәсми тантана ваҡытында кәрәк буласаҡ һәм башҡа әйберҙәрҙе лә матур итеп, бер стилдә эшләргә тырыша. Мәҫәлән, никах балдаҡтарын һалыу өсөн бәләкәй генә мендәрҙе, аҡса бүләк итергә теләгән ҡунаҡтар өсөн махсус һауытты, йәштәргә теләктәр яҙыу өсөн китапты һәм башҡа бик күп әйберҙең матур һәм үҙенсәлекле булыуын теләй улар. Ләкин барыһы ла бындай теләкте үҙ ҡулы менән тормошҡа ашыра алмай. Кемдеңдер ваҡыт яғы тығыҙ булһа, икенселәрҙең оҫталығы етеңкерәмәй. Бындай осраҡта улар ошондай эштәр менән махсус шөғөлләнеүселәргә мөрәжәғәт итә. Мин дә йәштәр өсөн ошондай матурлыҡ тыуҙырыусылар рәтендә.

Хаҡтар эштең төрөнә һәм талап ителгән башҡарыу ваҡытына, шулай уҡ эштең ауырлығына һәм үҙенсәлегенә ҡарап төрлөсә билдәләнә. Ләкин уртаса билдәләнгән хаҡтан күпкә артмай. Мәҫәлән, никах балдаҡтары өсөн бәләкәй мендәрҙәр 200-400 һум, аҡса һалыу өсөн һандыҡтар 450-600 һум, йәштәргә ЗАГС-тан сыҡҡанда һибеү өсөн ҡулланылған рауза сәскәһененең таждарын һалыу өсөн махсус һауыттар 25-45 һум тирәһе тора. Шулай уҡ туйға саҡырыу ҡағыҙы, теләктәр яҙыу китабы, никах ҡағыҙы өсөн махсус папка, йәштәрҙең тәүге ғаилә усағын тоҡандырыу өсөн матур итеп биҙәлгән май шәмдәре, шаһиттарға төрлөсә биҙәлгән лента йәки түш значоктары, мәңгелек мөхәббәт билдәһе итеп күпергә элеп китер өсөн йоҙаҡтар, туй фотоларын ҡуйыу өсөн махсус рамка һәм фотоальбом - барлыҡ был әйберҙәрҙе йәштәрҙең теләген иҫәпкә алып, матур итеп эшләп бирәм.

Бөгөнгө көндә төрлө биҙәү әйберҙәре күп, шуға күрә бындай эш менән булышыу ауыр түгел. Бындай эшмәкәрлекте хатта төп эштән буш ваҡытта ла атҡарырға була. Шуға күрә, ижади фантазияға бай, үҙ ҡулы менән матурлыҡ тыуҙырырға теләүселәр өсөн был шөғөл күңелле лә, килемле лә, тип әйтергә була. Башҡарған эшең йәштәр күңеленә хуш килеп, уларҙың күҙҙәрендә шатлыҡ осҡондарын күреү, йәмғиәтебеҙҙә тағы ла бер бәхетле ғаиләнең барлыҡҡа килеүендә һинең дә ҡатнашлығың бар икәнлегең аңлау икеләтә ҡыуаныс тойғоһо бүләк итә.

**Айгөл ХӘЛИУЛЛИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Мәғариф өлкәһендәге реформаларҙың ҡайһылары менән килешәһегеҙ, ҡайһылары менән риза түгелһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Рифат ӘЙЮПОВ, "Башҡортостандың башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2012" еңеүсеһе, Ишембай ҡалаһы:*** Мәғариф өлкәһендә һуңғы йылдарҙа индерелгән һәр яңылыҡтың үҙенең ыңғай һәм кире яҡтары бар. БДИ-ның ыңғай яғы: балаларға юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү еңелләште. Әммә бының кире яғы ла бар: балалар тик БДИ-ға ғына әҙерләнеп, нәфис әҙәбиәтте тағы ла әҙерәк уҡый, шуға ла телмәрҙәре, уйлау һәләте насар үҫешә башланы. Китап уҡымағас, балалар халҡыбыҙҙың традициялары, халыҡ ижадының матур өлгөләре, тарихыбыҙ менән таныш түгел. БДИ индереүҙән мәктәп уҡыусыһының белем сифаты ла артып киткәндер, тип уйламайым. Яңы дәүләт белем биреү стандарты индереүҙәре, бәлки, һәйбәттер, ләкин әлеге ваҡытта беҙ уға тулыһынса күсергә әҙер түгелбеҙ. Техник, методик база аҡһай, был бигерәк тә ауыл балалары өсөн кире күренеш.

Яңы стандарттар буйынса бөтөн балаларҙы бер ҡалыпҡа һалып ҡарайбыҙ. Проблемалы уҡытыу, тибеҙ, әммә уҡыусыларҙың үҫеш кимәле төрлө икәнен онотмайыҡ. Эйе, бала беренсе синыфтан уҡ яҡшы итеп уҡып китеүе мөмкин, әммә ҡайһы бер баланың һәләте урта синыфтарҙа ғына асыла. Әйтәйек, өс йәшлек балалар алдына, аяҡ кейемегеҙҙе үҙегеҙ табып кейегеҙ, тип мәсьәлә ҡуйҙыҡ, ти. 25 бала араһынан 5 бала, бәлки, был мәсьәләне ғәмәлгә атҡара алыр, әммә 25-е лә түгел. Бер нисә тапҡыр ярҙам иткәндән һуң ғына улар был мәсьәләне хәл итергә өйрәнәсәк. Шуға ла уҡыусыларҙы бер ҡалыпҡа һалыу дөрөҫ түгел, элекке традицион белем биреүҙе һаҡларға кәрәк ине. Яңы белем биреү стандарты буйынса уҡыта башлауға уҡытыусылар үҙҙәре лә әҙер түгел, был да күп аңлашылмаусанлыҡтарға килтереүе бар. Тәүҙә, бәлки, уҡытыусыларҙың профессиональ һәләтен үҫтереү өҫтөндә ныҡлы эшләргә кәрәктер.

Хәҙер мәғариф системаһында оптималләштереү процесы бара: мәктәптәр ҡыҫҡара, уҡытыусылар эшһеҙ ҡала, тимәк, стимул юҡ. Етәкселәр коллектив эсендә оптимизация үткәреп, стимул эшләргә ҡуша. Бының өсөн дә бит кемделер урамға сығарып ташларға кәрәк. Был үҙе үк кире күренеш, уҡытыусы аша балаларға ла кире йоғонто яһала.

Һуңғы йылдарҙа мәғарифты кем генә әрләмәй, элегерәкке заман менән сағыштырғанда, уҡытыусыға йылдан-йыл эшләүе ауырлаша. Был ауырлыҡтар реформалар күбәйеүе менән генә бәйле түгел, уҡытыусыларҙың өҫтөнән тикшереү органдары ла күбәйҙе. Мәғариф идаралығы, Мәғариф министрлығы, Обрнадзор ғына түгел, гостехнадзор, ростехнадзор, санэпидстанция көндән-көн яңы талаптар ҡуя, ә беҙҙең мәктәптәрҙең күбеһе күптән төҙөлгән, уларҙың күбеһе яңы нормаларға тура килеп тә бөтмәй. Ихласлап ҡына эшләргә уҡытыусының ваҡыты ла ҡалмай...

Бөтә был проблемалар, ауырлыҡтар тураһында конференцияларҙа, төрлө осрашыуҙарҙа әленән-әле һүҙ күтәреп торабыҙ, әммә улар хәл ителмәй. Сөнки өҫтә ултырған етәкселәр аҫта ниндәй проблемалар барлығын күреп етмәй. Унан һуң, мәғарифтағы бар реформаларҙы ла тиерлек һөнәри әҙерлеге булмаған чиновниктар уйлап сығара, проекттарҙы эшләүҙә уҡытыусылар, вуз уҡытыусылары, профессорҙар ҡатнашмай. Шул уҡ БДИ йәки "стандарттар" проекттары тураһында һөйләшеүҙәр административ ресурстың әүҙем йоғонтоһо аҫтында башҡарыла. Шуға ла иҡтисадҡа ҡоролған бындай реформаларҙың ыңғай яғын билдәләүе бик ауыр.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**Гәзит-журналдарға яҙылыу компанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Шулай итеп, 2003 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә яҙылырға була**. Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", 10 уҡыусыға - "Айыҡ туй сценарийҙары", 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

● Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов мәғариф системаларының 2012-2013 уҡыу йылына әҙерлек кимәле буйынса кәңәшмәлә ҡатнашты, сараны видеоконференция режимында Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев үткәрҙе. Кәңәшмәне асып, Дмитрий Медведев ағымдағы йылда төбәк мәғариф системаларын яңыртыуға 60 миллиард һум йүнәлтелеүе хаҡында әйтте. Шулай уҡ селектор кәңәшмәһе барышында 2012 йылда урта мәктәптәрҙә эшләгән уҡытыусыларҙың эш хаҡы үткән йылға ҡарағанда уртаса 6 мең һумдан ашыуға күтәрелеүе билдәләнде.

✓2012-2013 уҡыу йылы башына Башҡортостанда яҡынса 3800 белем биреү учреждениеһы иҫәпләнә, уларҙа 884 мең бала уҡый һәм тәрбиәләнә, 166 меңдән ашыу кеше эшләй. Яңы уҡыу йылына республикала 4 яңы мәктәп сафҡа индерелгән, йәнә 5 дөйөм белем биреү учреждениеһы 2012 йыл аҙағынаса асыласаҡ. Шулай уҡ быйыл төбәктә 50-гә яҡын балалар баҡсаһы төҙөлә башлаған. Яңы уҡыу йылы башына мәктәптәрҙә 28 мең компьютер урынлаштырылған.

✓Башҡорт дәүләт аграр университеты ғалимдары ике миллион һумлыҡ грантҡа эйә булды. Бындай юғары наградаға "Химия" йүнәлешле фән докторҙары етәкселеге аҫтында үткәрелгән ғилми тикшеренеүҙәргә ярҙам" проекты лайыҡ булды. Проект етәксеһе - Башҡорт дәүләт аграр университетының химия кафедраһы мөдире, химия фәндәре докторы Регина Исламова.

✓Лондонда Паралимпиада-2012 асылды. Спортсылар бер нисә төр буйынса көс һынаша башланы. Улар араһында - Рәсәй йыйылма командаһында Башҡортостан исеменән сығыш яһаған йөҙөүсе, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенты, паралимпия чемпионы Оксана Савченко 400 метрлыҡ дистанцияла (ирекле стиль) финалда көс һынашып, Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙары араһында тәүге алтын миҙалды яуланы. Йәнә бер Рәсәй спортсыһы Анна Ефименко әҙ генә миҙалға "йөҙөп" етә алманы, ул - дүртенсе урында. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2008 йылда Пекинда үткән Паралимпиадала Савченко өс тапҡыр донъя рекорды ҡуйғайны.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# МАТУР СӘСКӘ...

## тиҙ ҡойола

**Ҡыҙыҡ, сәскә матур булғаны өсөн генә тиҙ ҡойоламы икән? Юҡтыр. Ни өсөн тигәндә, беҙ йәйоҙоно күҙҙең яуын алып ултырған сәскәләрҙең дә барлығын беләбеҙ. Ҡыҫҡаһы, сәскәнең иртәме-һуңмы ҡойолоу-ҡойолмауы, һулыу-һулымауы уның матурлығына бәйле түгел. Был - аксиома. Тимәк, бында ҡапылғарай тура мәғәнәһендә аңлап булмаҫлыҡ кинәйә-мәғәнә ята. Улай булғас, бына әйтемдең бер варианты "Матур кеше бәхетһеҙ була" тигәнде нисек аңларға һәм аңлатырға була? Ғөмүмән, матурлыҡ бәхетһеҙлек күрһәткесе була аламы? Юҡ, әлбиттә. Сөнки матур ҡартайып, ҡартлығында ла күңел хөрлөгө кисереп йәшәүсе матур кешеләр ҙә бихисап. Тимәк, бында ла тағы ла аҫҡараҡ һалынған кинәйә-мәғәнә бар. Шул хаҡта фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Һәр ҡайһыбыҙ күк йөҙөндә йондоҙҙар атылыуын күҙәтергә ярата. Көн һайын, сәғәт һайын, минут һайын атылған йондоҙҙоң шырпы сыйғандай юлы һыҙылып китә лә, нисек барлыҡҡа килһә, шулай уҡ юҡҡа ла сыға ул юлаҡтар. Элек-электән ғаләм тормошон өйрәнеүселәр йондоҙҙар атылыуында Ер атмосфераһына һәм башҡа ғаләмдәр йышлығындағы атмосфераларға үҙ орбитаһынан сыҡҡыныуы арҡаһында килеп инеп, янып юҡҡа сығыусы ғаләм есемен йә планетаны күргән һәм күрә. Ҡайһы берәүҙәр уларҙы "йондоҙ тапсыҡтары", комета йә астероид тип тә атай. Шағирҙар иһә йондоҙ атылыуын кеше ғүмеренең балҡып һүнеүенә тиңләй. "Ниндәй йондоҙ ҡорбан итһен үҙен, юйыр өсөн минең исемде?" тип яҙа үҙенең "Икеләнеү" тигән шиғырында шағир Дамир Шәрәфетдинов.

Ә бер уйлаһаң, кем белә, бәлки, миллиардлаған күк есемдәренән ғибәрәт булған күрше галактикала йә башҡа ғаләмдә йондоҙ атылыуы беҙҙән Ер ише берәр тереклегә булған планетаның янып юҡҡа сығыуылыр? Кем белә, бәлки, унда ла беҙҙең һымаҡ кешеләр йәшәп, йондоҙ атылған саҡта ундағы кешелек юҡҡа сығалыр? Ә беҙ шундайын цивилизацияның, уны барлыҡҡа килтергән кешеләрҙең һәләкәткә осрауын иҫнәп кенә күҙәтәбеҙ ҙә, бер нәмә булмағандай, йортобоҙға инеп йоҡларға ятабыҙ. Иртәгәнен осраҡлы рәүештә генә тағы ла бер-ике йондоҙҙоң атылыуын күреп ҡалабыҙ. Ә беҙ күрмәй ҡалғандары күпме, уйлаһаң, уйылып, иҫләһәң, ишелеп китерлек бит был хәҡиҡәт.

Шул уҡ ваҡытта беҙҙең Еребеҙ ҙә мәңгелек түгел, уның да ғүмере сикле. Ҡасандыр килеп, беҙҙең Еребеҙ ҙә үҙ мөҙҙәте етеп, күсәренән ысҡынып китеп



янып юҡҡа сыҡҡанда икенсе бер планеталағы егет менән ҡыҙ был күренеште үҙҙәренең йөрәгендә һөйөү уты тоҡаныуға тиңләйәсәк. Һе, ҡалай ҡыҙғаныс буласаҡ, йәғни беҙҙең, Ер кешеләренең меңәр йылдар һуҙымында ыҙалай-михнәтләнә ғүмер һөрөүебеҙ ғаләм тарафынан шулай итеп кенә билдәләнәсәк. Һе, ярай әле егет менән ҡыҙ беҙҙең юҡҡа сығыуҙы һөйөүгә тиңләһә. Ә бит ғаләм ҡанундары аяуһыҙ. Ғалимдар Ерҙең ғүмере сикле булыуын әленән-әле иҫкәртеп тора. Мәңгелек күҙләгенән ҡарағанда, Ерҙең ғүмере кешенең бер һулышына тиң тип тә әйтәләр. Ерҙең ғүмере шундай оҙонлоҡта булғас, бер кешенең ғүмере бөтөнләй юҡ тигәнде аңлата инде. Ә кеше үҙенең юҡ ҡына мөҙҙәт ғүмерендә күпме хаталана, гонаһҡа бата, алдаша, хәйләгә бара, башҡаларҙың күңелен ҡыра. Юҡ ҡына мөҙҙәт ғүмер бирелеүенә шатланып та, йәшәүҙең мәғәнәһен дә аңлап өлгөрмәй ҡала әҙәм балаһы. Кем белә, бәлки, йондоҙҙар атылыуын күҙәткән саҡта кеше ошолар хаҡында уйланырға тейештер ҙә...

Юҡҡа ғына үҙенең кешелеклек бурыстарын намыҫ менән үтәп йәшәүсе кешеләр донъялыҡтан киткәндә уның ғүмерен йондоҙ атылыуына тиңләмәйҙәрҙер. "Матур кеше ине, бигерәк кеше йәнле булды, матур йәшәне, атылған йондоҙ кеүек ғүмере ҡыҫҡа булды..." тиҙәр ундай кешеләрҙе һуңғы юлға оҙатҡанда. Ә бит бындай һүҙҙәр бөтә кешеләргә ҡарата ла әйтелмәй. Хатта уларҙы был кешегә ҡарағанда күпкә иртәрәк, йәшерәк сағында вафат булһа ла. Ә бит миллиардлаған есемдәре йымылдап торған күктең дә атылған йондоҙо ғына дөйөм иғтибар үҙәгендә була. Күренекле яҙыусы Роберт Байымов үҙенең Әхмәтзәки Вәлиди тураһындағы романын "Сыбар шоңҡар" тип атаны. Ә бит шоңҡарҙарҙың сыбарлығы улар осҡан саҡта ғына, ҡанат аҫтындағы ағы күренгән саҡта ғына беленә. Тап шуның кеүек, беҙ яландағы сәскәләрҙең бары тик үтә сағыуҙарына, матурҙарына ғына иғтибар итәбеҙ ҙә, икенсе юлы ҡараған саҡта уларҙың һулыуын, ҡойолоуын билдәләйбеҙ һәм, матуры тиҙ ҡойола, тибеҙ. Ә башҡа сәскәләрҙең хатта барлығына ла иғтибар итмәйбеҙ. Кем белә, бәлки, уларҙы тәүгеләренә ҡарағанда ла ҡыҫҡа ғүмерлелер?

Сатирик шағир Буранбай Иҫҡужиндың "Күҙлек ватылғас" тигән шиғырында был фәлсәфә бик оригиналь, буранбайса парадоксаль булып яңғырай:

*Ниндәй рәхәт күҙлек*
*ватылһа:*
*Күренә тик ҙурҙар, матурҙар,*
*Ҡыуаныстан йөҙө*
*йылтырҙар.*
*Тик салынмай күҙгә*
*уртасылдар,*
*Бөршәйешеп бөткән*
*бахырҙар...*

Ҙурҙарҙан һәм матурҙарҙан башҡаларын уртасылдарға һәм бөршәйешеп бөткән бахырҙарға тиңләй Буранбай. Ул шулай тип әйтеүенә ҡарамаҫтан, яҙмышы уны ҙурҙар һәм матурҙар араһында йөрөргә насип итмәне, әммә беҙ барыбер Буранбайҙың вафатын йондоҙ атылыуына тиңләнек. Ысын шағирҙар, донъялыҡтан нисә йәштә йә ни рәүешле китеүенә ҡарамаҫтан, атылған йондоҙ кеүек үтә. Матур кеше ине Буранбай...

Ысынлап та, матур сәскә тиҙ ҡойоламы ла, матур кеше бәхетһеҙ буламы икән? Юғарылағы фекер йөрөтөүҙәрҙән сығып, шундай һығымтаға киләбеҙ: юҡ. Сөнки беҙ матур, башҡаларҙан ныҡ айырылып торған кешенең генә бәхетһеҙлеген күрәбеҙ, матур сәскәнең генә ҡойолғанын йә һулығанына иғтибар итәбеҙ. Бәс, шулай булғас, "Матур сәскә тиҙ ҡойола", "Матур кеше бәхетһеҙ була" тигән әйтемдәрҙең милли идея булырлыҡ әһәмиәте нимәлә һуң? Мин был хаҡта бик оҙаҡ уйланып йөрөнөм һәм был һорауға яуапты ғүмере атылған йондоҙҙай иртә өҙөлгән талантлы йырсы Райман Ишбаевтың атаһы Сәйәх олатайҙың улына әйтеп ҡалдырған һүҙҙәрендә таптым. Райман мәрхүм ул һүҙҙәрҙе бик йыш ҡабатлай торғайны. Ваҡытында уларҙың тулы мәғәнәһен аңлап еткермәгәнмен икән тип ҡуям:

*Яттар беҙҙәй булалмай,*
*Талдан ситән урәлмәй.*
*Үреп ҡарай, һүтеп ҡарай,*
*Бар(ы)бер беҙҙәй булалмай...*

Был дүрт юллыҡтан сығып ҡараһаҡ, әйтемдәрҙең бөтөнләй башҡа йүнәлештәге мәғәнәһе һыҙатлана. Кем белә, бәлки, матур сәскәне тиҙерәк йолҡоп алалар ҙа, ул тамырынан айырылғас, тиҙерәк һулыйҙыр? Бәлки, матур кешегә ынтылыусылар, дөғә итеүселәр һамыҫыңдалыр уның бәхетһеҙлеге?..

Ә күктә йондоҙҙар бер туҡтауһыҙ атыла ла атыла...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ*

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ МЕНӘН АЛДЫРА

**"Киске Өфө" гәзите башҡа баҫмаларҙан шуныһы менән айырыла: бында кешенең рухын күтәреүсе, аңына тәьсир итеүсе мәҡәләләр күберәк. Ҡайһы бер гәзиттәрҙә фотолар өҫтөнлөк ала, ә уҡырлыҡ бер ни ҙә юҡ. Ә беҙҙең "Киске Өфө" иһә эстәлеге менән үҙенә йәлеп итә.**

Минең үҙемә башҡорт халҡының тарихы, бөгөнгөһө, рухи ҡиммәттәр, бәхет, рухи һәм физик сәләмәтлек тураһындағы һөйләшеүҙәр оҡшай. Бай йөкмәткеле, ылыҡтырғыс эстәлекле булыуы гәзиткә һәм уны ижад итеүселәргә ҡарата оло ихтирам, оло ҡыҙыҡһыныу тойғоһо уята.

Мин үҙем студент саҡта уҡ рәхәтләнеп "Киске Өфө"нөң тарих тураһындағы материалдарын ҡулландым. Мәҫәлән, "Башҡортостан тарихы" дәреслегенә милләтебеҙ өсөн әһәмиәтле булған тарихи ваҡиғалар тураһында мәғлүмәттәрҙе мин ошо гәзиттән йыя торғайным.

Авторҙарға килгәндә, күберәк Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай яҙған мәҡәләләр оҡшай. Айырыуса уның "Милли идеяға торош" рубрикаһында баҫылған уйланыуҙары ҡыҙыҡтыра. Ғөмүмән, тележә ниндәй буш хәбәрҙәр менән мауыҡмай, яһалма сенсацияләр артынан ҡыумай, аңлап уҡығандарҙы биҙҙермәй торған гәзит ул "Киске Өфө". Тағы бер уңайлы яғы бар: аҙнаға бер тапҡыр сыҡҡанға күрә, уны уҡыуы ла, йыйып барыуы ла уңайлы.

**Зөбәржәт ӘМИНЕВА,**
**БДУ аспиранты.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔6-8 сентябрҙә Өфөлә Төрксой халыҡ-ара ойошмаһы мәҙәниәт министрҙарының даими советының XXX ултырышы үтә. Ултырышта Төрксой ағзалары булған илдәр - Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Төркиә, Төркмәнстандың мәҙәниәт министрҙары, шулай уҡ Алтай, Башҡортостан, Татарстан, Тыва, Саха-Якутия, Хакасия һәм Молдова вәкилдәре ҡатнашасаҡ. Сарала ҡатнашыусылар V "Туғанлыҡ" Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивален асыу тантанаһында, шулай уҡ М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты нигеҙендә Төрксой кафедраһын асыу тантанаһында буласаҡ.

✔Өфөлә 30 августан "Башҡортостан Республикаһы кубогы"на хоккей ярыштары башланды. Тәүге көндә "Салауат Юлаев" командаһы Чехияның "Энергия" командаһы менән уйнаны һәм 1:4 иҫәбе менән еңелде. 31 августа көндәҙ Новокузнецк "Металлург"ы менән "Энергия", кисен "Салауат Юлаев" менән Нефтекамск "Торос"ы көс һынашты.

✔Хәйбулла районы муниципаль район Советы ултырышында хакимиәт башлығы вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатыу мәсьәләһе ҡаралды. Совет ҡарары менән Рөстәм Хәйруллин, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, хакимиәт башлығы вазифаһынан бушатылды. Совет депутаттары ҡарары буйынса, Хәйбулла районы хакимиәте башлығы вазифаһына конкурс һөҙөмтәләре иғлан ителгәнгә тиклем әлеге вазифаны ваҡытлыса Раил Ибраһимов башҡарасаҡ.

✔ Өфөгә инә бал ҡорттары һатып алыу маҡсаты менән Германияның умартасылар берләшмәһе вәкиле Андрес Эркеленц килде. Ул башҡорт бал ҡорттары хаҡында Берлинда үткән "Йәшел аҙна-2012" Халыҡ-ара күргәҙмәһендә ишеткән. Визиты ваҡытында сит ил ҡунағы Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан ғилми-тикшеренеү үҙәгенең Архангел районындағы умартаһыҡтарына барырға планлаштыра. Оҙаҡламай инә ҡорттарҙың беренсе партияны Башҡортостандан Германияға ебәреләсәк.

✔Башҡортостан баш ҡалаһында әлеге ваҡытта рәсми рәүештә теркәлгән 7400-ҙән ашыу эшһеҙ иҫәпләнә. Уларҙың һәр береһенә икенән ашыу буш эш урыны тура килә. Бөгөн Өфөнөң вакансиялар банкында 17400 эш урыны тураһында мәғлүмәт бар.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Әлеге мәлдә мәктәптәрҙә тап башҡорт теле уҡытыусылары эшһеҙ ҡалыуҙан, дәрестәр һаны кәмеүҙән борсолоп, дер ҡалтырап ултыра икән, тимәк, был беҙҙең Мәғариф министрлығы намыҫында. Һәр хәлдә, күптәр шундай фекерҙә.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШ ҠАЛА УҠЫУСЫЛАРЫ... этика фәнен өйрәнәсәк

**Быйылғы уҡыу йылында баш ҡала мәктәптәренә беренсе синыфҡа 10 мендән ашыу уҡыусы килә. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының гуманитар мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Сынтимер Баязитов билдәләүенсә, һуңғы йылдарҙа Өфөлә уҡыусылар һаны йыл да яҡынса мең уҡыусыға артып тора.**

Сентябрҙән башлап бөтә 1-се синыф уҡыусылары ла яңы уҡыу стандарттары буйынса белем аласаҡ. Бынан тыш, яныса белем биреү тәжрибә рәүешендә Өфөнөң 25 мәктәбендә 2-се синыфта һәм 8 мәктәптә 3-сө синыфтарҙа индерелә.

Дим районында яңы уҡыу йылында өр-яңы 101-се мәктәп асыла. Уҡыу йортон төҙөү өсөн биш ай самаһы ваҡыт кәрәк булды. Хәҙер уҡыусылар менән лыҡа тулы эргә-тирәләге мәктәптәр иркенерәк һулап ҡаласаҡ. "Районда 825 урынлыҡ тағы бер мәктәп төҙөйәсәктәр, - тине Сынтимер Биктимер улы. - Әле уның проекты әҙерләнә. Ҡалала балалар баҡсалары ла асылып тора. Быйыл өс мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы сафҡа ингәйне. Сентябрҙә иһә Совет районында, унан һуң Колгуевский биҫтәһендә балалар баҡсаһы асылыуы көтөлә".

Баш ҡаланың дөйөм белем биреү учреждениелары ҡайһы бер педагогик кадрҙарға ҡытлыҡ кисерә башланы, тип билдәләне Сынтимер Биктимер улы. Беренсе синыф уҡыусылары күбәйә барғанлыҡтан, мәктәптәргә башланғыс класс уҡытыусылары етешмәй. Әлеге көндә бәләкәй кластарға 50 педагог талап ителә. "Уларҙы тиҙ табырбыҙ, тип уйлайбыҙ. Баш ҡалала был йәһәттән ҡыйынлыҡтар тыумай", - тип тынысландырҙы С. Баязитов. Бынан тыш, Өфө мәктәптәренә физкультура, технология уҡытыусылары кәрәк. Әлегә уларҙы башҡа фәндән уҡытҡан педагогтар алыштырып тора. Шулай уҡ балалар баҡсаларына тәрбиәселәр талап ителә. Әйтергә кәрәк, быйылғы уҡыу йылы алдынан ҡаланың мәғариф системаһына 200-ләп йәш белгес эшкә алынған.

Илдең башҡа уҡыу йорттарындағы кеүек үк, Өфөлә лә 4-се синыфтарҙа дин тарихы буйынса дәрестәр индерелә. "Баш ҡала мәктәптәрендә ниндәйҙер айырым дин нигеҙе өйрәнелмәйәсәк, - тип билдәләне мәғариф бүлеге етәкселәре. - Дәрес "Культурология һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" тип атала. Был фән буйынса дәреслектәр әҙер. Уҡытыусылар иһә махсус курстар үтте".

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Өфө мәктәптәрендә балаларҙы туҡландырыу көнөнә 38 һумға төшәсәк. Уҡыу йылы дауамында мәктәп ашханаларында хаҡ күтәрелә ҡалһа, ул бик үк һиҙелерлек булмаясаҡ. Туҡланыуҙың биш һумға ҡиммәтләнеүе ихтимал, тип белдерҙе мәғариф хеҙмәткәрҙәре. Һәм тағы. Баш ҡала мәктәптәрендә уҡыусыларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса ла саралар күрелгән. Күпселек мәктәптәрҙә видеокүҙәтеү урынлаштырылған, бинаға пластик карта ярҙамында инеү тәртибе ҡаралған. Был яңылыҡтар ҡаланың бөтә уҡыу йорттарында ла ғәмәлгә ашырыласаҡ.**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Республикала мәғариф эшмәкәрҙәренең август кәңәшмәләре булып үтте. Өфө ҡалаһы уҡытыусылары ла, баш ҡаланың башҡорт теле уҡытыусылары ла мәғариф кәңәшмәһенә йыйылып, яңы уҡыу йылына бурыстар билдәләне, проблемаларға асыҡлыҡ индерҙе. Тәүге сарала башлыса республика кәңәшмәһендә һүҙ барған дөйөм мәсьәләләр ҡаралһа, икенсеһендә иһә бөгөн күптәрҙе борсоған һорауҙар буйынса асыҡтан-асыҡ һөйләшеү булды.**



# ЭШҺЕҘЛЕК КЕМГӘ ЯНАЙ?

## Башҡорт теле уҡытыусыһына инде...

Рәсәй мәғарифын бер туҡтауһыҙ модернизациялау һөҙөмтәһендә быына нисә йыл рәттән яңы уҡыу йылын ниндәйҙер яңылыҡтар менән ҡаршылайбыҙ. Һәм улар мотлаҡ республика мәктәптәрендә дәүләт теле булараҡ уҡытылған башҡорт теленә ҡағылмайынса ҡалмай. Былтырғы уҡыу йылынан башланғыс мәктәптең беренсе синыфы яңы федераль дәүләт белем биреү стандарты (ФГОС) күсеү, шулай уҡ унынсы һәм ун беренсе синыфтарҙа профилле белем биреүгә бәйле дәүләт теле уҡытылмауы сәбәпле, баш ҡала мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнеү кәмегән һәм 82 процент тәшкил иткән. Быйыл был һан тағы ла түбәнәйеүе ихтимал, сөнки хәҙер икенсе синыфтар ҙа яңы стандарттар буйынса белем аласаҡ. Былай барған хәлдә, ун йыл эсендә башҡорт теленең мәктәптәрҙән ҡыҫырыҡлап сығарылып бөтөүе бар, тип хәүефләнгән уҡытыусыларҙың һүҙендә, әлбиттә, дөрөҫлөк бар. Быға тиклем дә дәүләт телдәрен федераль стандарттарҙың яҡлағаны булманы, ул уҡыу планына милли-төбәк һәм мәктәп компоненты иҫәбенә индерелә ине. Милли-төбәк компоненты юҡҡа сығарылғас, яңы стандарттар буйынса дәүләт теле булараҡ башҡорт теле дәрестәрен мәктәп компоненты иҫәбенә генә хәл итеп була, ә уның һаны күп түгел, бары бер сәғәт. Һөҙөмтәлә, әгәр ҙә мәктәп администрацияһы ошо бер сәғәтте башҡорт теленә бирергә хәл итһә, быйыл икенсе синыфтар бөрәр сәғәт булһа ла дәүләт теле өйрәнә башлаясаҡ. Милли мәктәптәрҙең икенсе синыфында был бер сәғәтте "Тормош һабаҡтары" дәресенә бирергә тәҡдим ителә.

Унынсы һәм ун беренсе синыфтарҙа башҡорт телен уҡытыуға килгәндә (иҫәгеҙгә төшөрәбеҙ, улар әлекке стандарттар буйынса белем ала), уҡыу планында - бигерәк тә милли мәктәптәрҙә - ике сәғәт милли-төбәк компоненты бар. БР Мәғариф министрлығының Милли мәғариф һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлек бүлеге етәксеһе Рәйсә Күзбәкова әйтеүенсә, былтырғы уҡыу йылында мәктәптәр был сәғәттәрҙе рус туған теленә, башҡорт теленә һәм туған телдәргә биргән.

- Был Берҙәм дәүләт имтихандарында рус теленең мотлаҡ фәндәр исемлегендә булыуы менән бәйлелер ҙә, тик синыфтағы бар уҡыусылар ҙа рус телен уҡый икән, был дәрес туған тел дәресе түгел, ә федераль компоненттағы рус теле дәресе иҫәпләнә. Тимәк, уҡыу планы, закон боҙола. Ошо ике сәғәтте лә туған телдәргә йәки улар бәләкәй синыфтан, әлектән уҡытылмаған осраҡта, башҡорт дәүләт теленә бүлергә мөмкин, - тине уҡытыусыларға мөрәжәғәт итеп Рәйсә Күзбәкова.

Мәғариф системаһын оптималләштереү һөҙөмтәһендә, синыфтағы уҡыусыларҙы төркөмдәргә бүлеү ҙә ҙур һорауҙар тыуҙырасаҡ, ти белгестәр. "Башҡорт балалары башҡорт телен 4 йә 5 сәғәт уҡый, башҡа балалар 2 сәғәт уҡый, шуға ла уларҙы бер нисек тә ҡушып уҡытырға ярамай, һәр төркөмдөң уҡыу пландары айырым. Шуға ла синыфта 20 бала икән, мотлаҡ бүлергә кәрәк, - тине Рәйсә Абдрахман ҡыҙы. Ул шулай уҡ быйылдан теләк буйынса мәктәптәрҙән 5 көнлөк эш көнөнә күсеү ихтималлығы барлығын, уның һөҙөмтәһендә туған телдәр зыян күрмәскә тейеш, тигән фекер ҙә иштерҙе.

Шулай ҙа быйылғы яңылыҡтарҙың иң аптыратҡаны шул: башланғыс мәктәптә - дүртенсе синыфтарҙа быйылғы уҡыу йылынан индерелә башлаған "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" дәресе дәүләт теленең бер сәғәте иҫәбенә уҡытыласаҡ. Йәғни, федераль компонент милли-төбәк компоненты иҫәбенә уҡытыла! Уҡыу пландары раҫлангас, уның тирәһендә шау-ҡуптарыуҙың фөтүәһе юҡ кеүек тә, әммә Бөтөн донъя башҡорттары Ҡоролтайының Мәғариф һәм фән буйынса комиссия рәйесе Фәнзил Сәньяровтың, ни өсөн донъяуи этика дәресе башҡорт теле иҫәбенә уҡытылырға тейеш һуң, тигән фекере үҙ теле өсөн битараф булмаған һәр кемде лә борсойҙор. Ҡайҙа башҡорт телен яратмайҙар, шунда уны уҡытмау өсөн сәбәп тә табалар икәне билдәле лә, тик был осраҡта республиканың Мәғариф министрлығы юл ҡуйған был хатаны төҙәтеү өсөн дөрөҫлөктө ҡайҙан эҙләргә һуң?

Һуңғы осорҙа һәр ҡатмарлыҡты кәрәкле закондар булмауға япһарып өйрәнһәк тә, закондар бар беҙҙә. Шул уҡ Рәсәй Федерацияһының Мәғариф тураһындағы законының 6-сы статьяһының 6-сы пунктын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Әллә республика Конституцияһы, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы закон дәүләт телен өйрәнеүгә ҡамасаулаймы? Бәлки, етәкселәр һеҙҙең менән беҙҙең хоҡуҡи аңһыҙлыҡҡа һәм, ыңғайлы ул, киреме, ҡабул ителгән һәр ҡарарҙы көндәм генә тормошҡа ашырасағыбыҙға ышанғандыр? Граждандыҡ позицияһы тигән һүҙ бөгөн модала булһа ла, дәүләт функцияһы тигән төшөнсә лә юҡҡа сыҡмаған һәм республиканың Мәғариф министрлығы Үҙәктән килгән һәр ҡарар-күрһәтмәне ерлеккә ярашлтырып көйләргә, йүнәлеш бирергә, ойоштороорға бурыслы. Әммә беҙ быны бөгөн тоймайбыҙ. Әлеге мәлдә мәктәптәрҙә тап башҡорт теле уҡытыусылары эшһеҙ ҡалыуҙан, дәрестәр һаны кәмеүҙән борсолоп, дер ҡалтырап ултыра икән, тимәк, был беҙҙең Мәғариф министрлығы намыҫында. Һәр хәлдә, күптәр шундай фекерҙә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яңы стандарттар нигеҙендә рухи-әхлаҡи үҫеш концепцияһы, Рәсәй гражданины шәхесен тәрбиәләү ята, тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Тик үҙ дәүләтебеҙҙә - дәүләт телен, үҙ балабыҙға туған телен уҡыта алмаһаҡ, нисек итеп рухи тәрбиә бирә, ниндәй илһөйәр шәхес үҫтерә алаҫаҡбыҙ һуң? Йәмғиәт фекерендә "илһөйәрлек", "демократия", "йәмғиәт мәнфәғәте" тигән төшөнсәләр хурлыҡҡа төшөп, кире төҫ алғанда, дәүләт власы органдарына ихтирам тойғоһо юғалғанда, илдә позитив идеология һәм анығ билдәләнгән милли идея булмағанда граждандыҡ тураһында һөйләү, яңы стандарттар ярҙамында уҡыусыларҙа толерантлыҡ тәрбиәләргә тырышыу үҙе ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәр тыуҙыра. Бәлки, беҙгә "мәғарифты модернизациялау" сәйәсәтенең тарихи тупикка килтерәсәген танырға ваҡыттыр?**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Волга буйы федераль округының йәш гвардиясылары балиғ булмағандарға алкоголле эсемлектәр һатыу фактарын асыҡлау һәм бындай хоҡуҡ боҙоуҙарҙы туктатыу буйынса рейдтар үткәрә башланы. Һуңғы ваҡытта балиғ булмағандарға алкоголле эсемлектәр һатҡан эшҡыуарҙарға ҡатыраҡ яза биреү буйынса федераль кимәлдә һөйләшеүҙәр алып барыла.

✓Рәсәй Президенты советнигы Александр Бедрицкий Башҡортостанда граждандарҙы ҡабул итте. РФ Президентының мобиль йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһенең эш төркөмө республикала 27 августан эшләне. Белгестәр мөрәжәғәт итеүселәрҙең иң киҫкен мәсьәләләре буйынса тикшереү үткәрҙе. Һорауҙар, нигеҙҙә, торлаҡ-коммуналь өлкәгә, ауыл һәм ҡала халҡын һыу, газ менән тәьмин итеү, юлдарҙы ремонтлау мәсьәләләренә ҡағылды. Эш төркөмө урындарҙа проблемалар менән танышты, ремонт талап ителгән объекттарҙы ҡарап сыҡты. Барлыҡ һорауҙар буйынса аңлатмалар бирелде.

✓Төбәктә VII "Башҡортостандың иң яҡшы китапханасыһы" республика конкурсының зона туры үтә. Унда 54 китапхана ҡатнаша. Зона этаптарында еңеүселәр республика конкурсында ҡатнаша ала. Еңеүгә өлгәшеү өсөн китапхана хеҙмәткәрҙәре китапты киң йәмәғәтселеккә тәҡдим итеү буйынса инновацион проект әҙерләргә тейеш. Иң яҡшы китапханасылар ноябрь аҙағында билдәләнә.

✓Белем көнөндә, 1 сентябрҙә, өфөләләрҙе бер юлы ике йәрминкә көтә. "Пушкинский" сауҙа-сервис комплексына килгән кешеләр Бишбүләк, Благовар, Йәрмәкәй, Ҡариҙел, Кушнаренко, Миәкә һәм Өфө райондары умартасылары-ның шифалы продукцияһын һатып ала аласаҡ. Өфөнөң төньяҡ өлөшөндә йәшәгәндәр өсөн бал йәрминкәһе ике көн - 1 һәм 2 сентябрь дауамында С.Орджоникидзе исемендәге майҙанда ойошторола. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, көҙгө йәшелсә йәрминкәләре Өфөлә 15 сентябрҙән башлана.

✓Ағымдағы йылдың ноябрендә Башҡортостан баш ҡалаһында йәнә бер гипермаркет асыу планлаштырыла. Әлеге ваҡытта ул Өфө ҡалаһы Киров районының Пугачев урамында төҙөлә. Яңы гипермаркеттың дөйөм майҙаны 12 мең квадрат метр тәшкил итәсәк. Объект файҙаланыуға тапшырылғандан һуң, унда яҡынса 300 яңы эш урыны булдырыласаҡ. Яңы сауҙа объектының башҡаларҙан айырмаһы шунда - ул тәүлек әйләнәһенә эшләйәсәк.

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

# ИҢ БАЛЛЫ ТӨБӘКТЕҢ...

## иң баллы йәрминкәһе



**Үткән ял көндәрендә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, БР Ауыл хужалығы министрлығы, Өфө ҡала округы хакимиәте, Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан фәнни-тикшеренеү үҙәге һәм Башҡортостан халыҡтарының "Дуҫлыҡ" йорто тарафынан Өфө ҡалаһының "Аҡбуҙат" ипподромы алдындағы майҙанда "Башҡортостан - Рәсәйҙең баллы иле" бал фестивале ойошторолдо. Фестиваль сиктәрендә XII Республика умартасылар һәм VI Йәш умартасылар конкурстары уҙҙы. Дөйөм алғанда алты йөҙҙән ашыу бал һатыу нөктәһе эшләне, фестивалдә меңдән ашыу умартасы ҡатнашты, бал байрамын беҙҙең журналистар ҙа тамаша ҡылды, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар эҙләне.**

### Умартасы килемле шөғөл

Фестиваль тураһындағы һүҙҙе уны ойоштороусыларҙың береһе булған ойошманың - Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортостан фәнни-тикшеренеү үҙәге генераль директоры Әмир Ишемғолов һүҙҙәренән башлау дөрөҫ булыр. Ул беҙгә түбәндәгеләрҙе һөйләне:

- Был фестиваль киләсәктә бөтә Рәсәй күләмендә үткәрелә торған матур сараға әйләнеп китер, тип ышанабыҙ. Сөнки Башҡортостан Рәсәйҙең иң баллы төбәге ул. Рәсәйҙәге йүкә урмандарының 70 проценты Башҡортостан ерендә урынлашҡан. Ә йүкә - бал биреүсе иң төп ағас.

Бөгөн дәүләтебеҙҙә 55 мең тонна бал етештерелә. Рәсәйҙең башҡа төбәктәре менән сағыштырғанда, Башҡортостанда мөмкинлектәр тағы ла күберәк: беҙҙә йылына 175 мең тонна бал етештерергә була. Был йүнәлеш айырыуса ауыл ерендә бик килемле. Яңы эш урындары барлыҡҡа килә. Халыҡтың көнкүреше яҡшыра. Умартасы һәр ваҡыт етеш йәшәгән һәм йәшәй. Ошо принципты оноторға ярамай. Башҡортостан тәбиғәте лә бал ҡорттары өсөн бик ҡулайлы. Сағыштырыу өсөн әйткәндә, умартасылыҡ йәһәтенән Ҡаҙағстан, Саха-Якутия республикаларында беҙҙәге кеүек бай тәбиғәт мөмкинлектәре юҡ. Бөтөн Саха-Якутияла бөгөнгө көндә ике генә умартасылыҡ эшләй.

Солоҡтар тураһында ла әйтке килә. Революцияға тиклем башҡорт ҡортсоларының ҡайһы берҙәренең меңдән ашыу солоғо булған. Бөгөн йүкә ағасын ырып, ҡорт ҡундырыу йүнәлеше халыҡ араһында тағы киң тарала башланы. Сөнки халыҡ телендә ҡырағай бал тип йөрөтөлгән балға Рәсәй һәм донъя баҙарында һорау ҙур. Элек солоҡсолоҡ Бөрйән районының Шүлгәнташ ҡурсаулығы территорияһында ғына һаҡланған булһа, бөгөнгө көндә бындай оялар ҡурсаулыҡтан ситтә лә бар, хатта ҡурсаулыҡ эсендәгеләрен һан буйынса уҙып та китте, шуныһы айырыуса ҡыуаныслы...

### Ярыша ла белә улар

Умартасылар конкурсында 35 райондан 41 умартасы беренселек өсөн көрәште. "Йәш умартасы" конкурсында иһә 25 райондан 30 уҡыусы ҡатнашты. Солоҡсолар конкурсы айырым үткәрелде һәм унда 3 райондан 8 умартасы ҡатнашты. Ярыштарҙың иң оло ҡатнашыусыһы Йәрмәкәй районынан Таһир Дәүләтгәрәевҡа 83 йәш булһа, иң кесе ҡатнашыусы Стәрлетамаҡ районынан Эмил Зәбировҡа 7 йәш кенә ине. Профессиональ умартасылар араһында үткәрелгән бәйгелә Баймаҡ районынан Азат Ниәтшин, Илеш районынан Илдар Саматов, Тәтешле районынан Леонид Байдуллин еңеүсе булып танылды. Мәктәп уҡыусылары араһындағы бәйгелә Тәтешле районы Арышбай мәктәбе уҡыусыһы Люба Зиянбаева, Баймаҡ ҡалаһынан Юнир Ҡайниев, Шаран районан Виталий Маркеловҡа етеүсе булманы. Солоҡсолар араһындағы ярышта Бөрйән районынан Рамаҙан Исламбаев һәм Илфат Әминов командаһы беренсе урынды, шулай уҡ Бөрйәндән Сынтимер Иҫәнғужин һәм Басир Мостафин командаһы - икенсе, Белорет районынан Тәлғәт Фәтҡуллин һәм Радик Мәхмүтов командаһы өсөнсө урынды яуланы. Әйткәндәй, ҡатнашыусылары әҙ булһа ла, солоҡсолар араһындағы ярыш барған майҙандан тамашасы өҙөлмәне. Кемдер был ярышты күреп: "Бына, минең ата-бабаларым ошолай итеп солоҡ эшләгән, бал йыйған!"- тип һоҡланһа, икенселәр өсөн был кәсеп бөтөнләй ят ине. Эйе, умартасылыҡ донъяның күп төбәктәрендә киң үҫешкән. Ләкин солоҡсолоҡ башҡорт умартасылығының үҙенсәлеген, уникаллеген билдәләгән айырым бер күренеш. Был боронғо кәсеп бары Башҡортостан ерендә генә һаҡланып ҡалған. Халҡыбыҙҙың тәбиғәт менән аңлашып йәшәүе уның тап ошо һөнәргә сетерекле мөнәсәбәтендә лә сағыла инде. Бал алыуҙың килемлерәк, унайлыраҡ алымдары булып та, ҡатмарлы һәм ныҡлы көс, оҫталыҡ талап иткән солоҡсолоҡ төрөнән дә баш тартмауы башҡорттоң консерватив ҡарашлы булыуында түгелдер. Башҡорт өсөн бал, умартасылыҡ, солоҡсолоҡ килем алыу сығанағы ғына түгел, ә фәлсәфәһе лә, тарихы ла, йәшәү рәүеше лә, тәбиғәт мөғжизәләренә үҙенсәлекле мөнәсәбәте лә ул.

(Дауамы 6-сы биттә).

СПОРТ

# ЕҢЕҮ АРТЫНАН - ЛОНДОНҒА!

**Һәр профессиональ спортсының иң ҙур хыялы - Олимпия уйындарында ҡатнашыу. Оҙайлы һәм көсөргәнешле күнекмәләр, төрлө имгәнеү һәм йәрәхәттәр - барыһы ла Олимпиада хаҡына. Ә ғәрип спортсылар өсөн бындай масштаблы сарала ҡатнашыу икеләтә яуаплы һәм мөһим. Шуға күрә Паралимпия уйындарында ҡатнашырға хоҡуҡ алған спортсылар уға етди әҙерләнә. 29 августан 9 сентябргә тиклем Лондонда уҙасаҡ XIV Паралимпия уйындарында ла планетаның иң көслө һәм билдәле паралимпия спортсылары йыйыласаҡ.**

Лондонға килеүсе спортсылар өсөн барлыҡ шарттар ҙа тыуҙырылған. Улар сығыш яһаясаҡ спорт объекттары, йәшәйәсәк ҡунаҡханалар һәм юлдар спортсыларҙың физик үҙенсәлектәрен күҙ уңында тотоп эшләнгән. Шулай уҡ Паралимпия уйындарын киң матбуғат сараларында яҡтыртыу һәм паралимпия хәрәкәтен үҫтереү һәм нығытыу өсөн дә күп көс түгелә.

XIV йәйге Паралимпия уйындарында 166 илдән 4280 спортсы ҡатнашасаҡ. Рәсәйҙән Лондонға 183 спортсы юлланды. Башҡортостан Республикаһынан Рәсәй командаһы составында 16 спортсы сығыш яһай. Улар енел атлетика, йөҙөү һәм фехтование спорт төрҙәрендә донъяның башҡа көслө спортсылары менән көс һынашасаҡ. Был исемлеккә Елена Паутова, Алексей Лабзин, Андрей Коптев, Анна Сорокина, Альберт Әсәҙуллин, Илдар Помыкалов, Андрей Жирнов, Анастасия Овсянникова, Айгөл Сәхибзадаева, Оксана Савченко, Александр Неволин-Светов, Михаил Зимин, Марат Йосопов, Иван Андреев, Тимур Хәмәтшин һәм Тимур Фәйзуллин кеүек спортсылар ингән. Башҡортостан паралимпийсылары донъя спортының юғары баҫҡысында тора һәм уларҙың Лондондан миҙалдар менән ҡайтасағына шаныс көслө.

2012 йылғы Паралимпия уйындары исемлегенә 20 спорт төрө ингән. Еңеүселәрҙе бүләкләү өсөн 503 комплект миҙал эшләнгән. Рәсәй спортсылары шуларҙың 12-һендә - ултырып волейбол уйнауҙа (ир-егеттәр), академик ишеүҙә, велосипед спортында, дзюдола, енел атлетикала, өҫтәл теннисында, пауэрлифтингта, йөҙөүҙә, пуля менән атыуҙа, уҡтан атыуҙа, фехтованиела һәм 7*7 футболда - ҡатнашасаҡ.

Лондонға юлланыр алдынан паралимпия уйынсылары Рәсәй Президенты менән осрашты һәм үҙҙәренең бары тик еңеү артынан ғына барыуҙарын белдерҙе. Рәсәй Президенты миҙал яулаусы паралимпия спортсыларын бүләкләү ҙә Олимпия спортсыларыныҡы кеүек буласағын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Тимәк, алтын миҙалға лайыҡ булыусы спортсы 4 миллион һум, көмөш миҙал алыусы 2,5 миллион һум, ә бронза хужаһы 1,7 миллион һум күләмдә аҡсалата премия аласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**31 августа Рәсәй командаһы 2 алтын, берәр көмөш һәм бронза миҙалдар менән таблицаның 6-сы урынын биләй.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



### Таштарҙан ҡотолоу

Бөйөр һәм һейҙек юлдарындағы таштарҙан ҡотолоу өсөн:

❖ көн һайын 2 ҡалаҡ зәйтүн майы эсергә;

❖ 4-6 ай буйы көнөнә 3-4 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ кишер һуты эсергә; ❖ картуфты ҡабығы менән бешереп, һыуын ашар алдынан сирек йәки ярты стакан күләмендә 3 аҙна буйы эсергә. 1-2 айҙан тағы ҡабатларға; ❖ ҡара торма һутын тигеҙ өләшләтә бал менән ҡатнаштырып, көнөнә 3 мәртәбә, ашарҙан алда 30 минут алда, берәр балғалаҡ эсергә;

❖ күп хәрәкәтләнергә - был таш һәм ҡомдо ҡыуа;

❖ берәр балғалаҡ гөлйемеш сәскәһен һәм емешен эмаль һауытҡа һалып, өҫтөнә ҡайнап торған һыу ҡойорға ла, 2 сәғәт тәнәтергә. Көн һайын сәй итеп эсергә.

### Ҡарабойҙай дауалай

Ашҡаҙан аҫты бизе ауыртһа, 1 йәки 2 ҡалаҡ ҡарабойҙай ярмаһын ҡәһүә тартҡыстан үткәрергә һәм 1 стакан ҡатыҡ йәки эремсек һыуына һалып болғатырға. Төнгөләккә ҡалдырырға һәм иртәнсәк ас ҡарынға ашарға.

### Ябығыу өсөн

Ябығам, тиһәң, тары бутҡаһы аша. Бының өсөн ярманы һыуҙа бешереп, майһыҙ ашарға кәрәк. Тары ярмаһында тәнгә май йыйҙырмаусы матдәләр бар. Дауалау курсы бер аҙна, йәғни, бутҡаны аҙна буйына ашарға кәрәк. Тары бутҡаһын бауыр, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары мәлендә лә ашау файҙалы. Ул йөрәк эшмәкәрлеген дә нығыта, көйләй. Шулай уҡ мускулдарҙы ла нығыта, тәндән төрлө шлактарҙы ла сығара.

### Юғары ҡан баҫымы

Сепрәкте 5-6 процентлы шарап һеркәһенә манып, 5-10 минутҡа үкселәргә һалып торорға. Был ваҡытта ҡан баҫымы кимәлен күҙәтеп торорға. Ул нормаға килгәс, процедураны туҡтатырға.

### Үпкә шешһә

Киптереп ваҡланған әрем үләнен бер семтем генә алып, күп булмаған күләмдәге һыу менән эсегеҙ. Ашар алдынан ярты сәғәт алда, көнөнә өс тапҡыр ҡабул итергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

# ИҢ БАЛЛЫ ТӨБӘКТЕҢ...

## иң баллы йәрминкәһе

(Башы 5-се биттә).

### Һатып алдым татлы бал…

Был сарала сифатлы, иң шифалы башҡорт балын бушлай тәмләп ҡарарға, шулай уҡ сағыштырмаса арзан хаҡҡа һатып алырға мөмкин ине. Өс литрлыҡ һауыттағы балдың хаҡы мең ярымдан ике мең һумғаса баһаланды. Бер умартасы әйтмешләй, сифатлы бал арзан булмай. Был көндө бал шундай принцип менән һатылды һәм һатып алынды. Һәр хәлдә, бал һатыусылар үҙ тауарының баһаһын яҡшы белә һәм хаҡын да шуға ярашлы ҡуя. Бөрйән балы, мәҫәлән, һәр йылдағыса башҡаларҙан ҡиммәтерәк торҙо һәм иң сифатлы бал барыбер ҙа Бөрйән районында икәнен һатып алыусылар ҙа аңлап тора, һатыулашыусы, дәғүә белдереүсе ишетелмәне. Киреһенсә, был юлы ла Бөрйәндән килтерелгән балды сират тороп һатып алып бөтөрҙөләр. Шуға ла "Бөрйән балы" маркаһын үҙләштереүселәр ҙә бихисап бит. Ошо йәрминкә аҙағында ла бер нисә һатыусы үҙ тауары эргәһенә "Бөрйән балы" тип яҙып ҡуйырға тартынманы. Ләкин һатып алыусыларҙы улай еңел генә алдап булмай шул, бал тәмен яҡшы белә беҙҙең өфөләләр.

Нисек кенә булмаһын, йәрминкәгә килгән һатып алыусылар бындағы һары, көрән, ҡыҙғылт балды маҡтап туйманы. Жәүәт Ғәлиев исемле пенсионер, мәҫәлән бал йәрминкәләрен бер ҙә ҡалдырмауы, сөнки бында һәр ваҡыт яҡшы сифатлы ғына бал һатылыуы тураһында һөйләп торҙо. Бөгөн дә ул 12 литр бал һатып алды: "Балаларыма ла алам, сөнки улар бөгөн эштә, килеп өлгөрмәйҙәр", - тине ул. "Ниңә тап ошо һатыусының балын алырға ҡарар иттегеҙ һуң?" тип һорауыбыҙға ул: "Был һатыусының ысын умартасы икәнлеге йөҙөнә яҙылған", - тип яуапланы. Һатып алыусыға рәхмәт әйтеп, һатыусы менән дә һүҙ ялғап ебәрҙек.

### Харам тип иҫәпләйем…

Жәүәт Ғәлиев ағайҙың маҡтауына лайыҡ булған был һатыусы Күгәрсен районынан Ишмырҙа Сураҡов атлы умартасы булып сыҡты. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, ҙур ҡалалар эргәһенән йыйылған балдың тәме ауыл ерендә йыйылған бал менән һис тә ярыша алмай. Тимәк, башҡорт балының шифаһы һәм тәме сере уның ниндәй төбәктә йыйылыуына туранан-тура бәйләнгән. Йәшерен-батырыны юҡ, кемдер ҡорттарына шәкәр ашатып та етештерә был шифалы ризыҡты. Әммә, иманыбыҙ камил, ысын умартасы бер ҡасан да бындай аҙымға бармаҫ. Әңгәмәсебеҙ ҙә ҡорттарына шәкәр ашатып йә балына шәкәр ҡушып һатҡан осрактар тураһында үҙ фекерен йәшермәне: "Ундай балды харам тип иҫәпләйем", - тине ул.

Ишмырҙа ағай Сураҡов менән артабан әңгәмә ҡорабыҙ. Уның әйтеүенә ҡарағанда, ирҙең бәхетен бал ҡорттарының һәм йылҡы малының ишәйеүе менән, ә ҡатын-ҡыҙҙыҡын ҡаҙҙары уңыуы менән билдәләйҙәр. Ысынлап та, был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ бар. Ишмырҙа Шәкирйән улының олаталары ла, атаһы ла умартасы булған икән. Бөгөнгө көндә уның ҡустылары ла, төрлө эштә эшләп йөрөһәләр ҙә, умарта тотоп, балды үҙҙәре етештерәләр. "Беҙҙең нәҫелдең төп шөғөлө инде - умартасылыҡ, үҙем егерме йылдан артыҡ умартасылыҡ менән булышам. Был сезонда 750 килограмм бал алдым. Был шөғөл буйынса ҡайһы бер тәжрибәләрем дә бар", - тине 75 йәшлек әңгәмәсебеҙ. Шунан ҡайһы бер тәжрибәһе, һығымталары менән уртаҡлашты. Шуларҙың береһе - йомортҡала сағында уҡ әрегорттарҙы айырып алыу һөҙөмтәһендә эшсе ҡорттарҙың әүҙемерәк эшләй башлауы. Стресс үҙенең ыңғай һөҙөмтәһен биреүе тураһындағы мәғлүмәт беҙгә ҡыҙыҡлы тойолдо. Бәлки, был хаҡта тәжрибәле умартасылар беләләр ҙә әле.

Тағы бер тәжрибә тураһында. Умартасылар араһында умарталыҡтарын бер урында тотоусылар һәм бал йыйыу осоронда уларҙы бер-нисә урынға - төрлө сәскәле урмандар, баҫыуҙар буйлап күсереп йөрөтөүселәр осрай. Йәрминкәлә бал һатыусы умартасылар араһында икенсе төркөмгә ҡараусылар күберәк тойолдо беҙгә. Әлеге ысулдарҙың ҡайһыныһы яҡшыраҡ икәнен белергә теләп, бернисә кешегә ошо һорау менән мөрәжәғәт иттек. Бөрйәндән килгән бер умартасы уҙаман әйтеүенсә, барыһы ла бал ҡорттарының көсөнә бәйле. Әгәр улар көслө икән, бер урында ултырған саҡта ла балды күп йыя. Уның ҡарауы, күсмә умарталыҡтарҙың ҡорттарына алыҫҡа осорға түгел, шуныһы отошло. Әммә баҫыуҙа үҫкән сәскәләрҙе, бесәнде, ғәҙәттә, ваҡыты еткәс сабалар һәм бынан һуң күп ҡорттар һәләк була. Мәләүез районы Васильевка ауылынан килгән икенсе бер әңгәмәсебеҙ (исемен әйтергә ҡыйынһынды) фекеренсә, умарталыҡтарҙы күсереп йөрөтөү үҙен арттырып аҡлай. Был ағай үҙе быйыл дүрт ергә күсенгән, шуға ла һәр төрлө балы һығылып тора өҫтәлендә. Үҙен ҡалалағы эш урынынан ҡыҫҡартҡандар ҙа, ауылға барып төпләнергә мәжбүр булған. Бер умартанан башланған килеме бөгөнгө көндә предприятиела эшләгән сағынан күпкә юғарыраҡ. Бөгөнгө көндә был ағай аяғында ныҡлы баҫып торған крәстиән тип иҫәпләй үҙен.



ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Айтуған ҠОЛБИРҘИН, умартасы, Бөрйән районы Иҫке Мөсәт ауылы, 31 йәш:** Умартасылыҡ менән 2003 йылда әрме хеҙмәтенән ҡайтҡандан бирле шөғөлләнәм. Тәүге ун умартаны атайым бирҙе. Өйрәнә-өйрәнә торғас, умарталарҙы ике тиҫтәгә еткерҙем быйыл. Кәләшем Гөлфинә лә умартасылыҡ серҙәрен белә, миңә ярҙам итә. Ул мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән белем бирә ине, оптимизация тигән нәмә арҡаһында быйыл ҡыҫҡартыуға эләкте. Шуға күрә, бар күҙ терәп торған шөғөлөбөҙ - умартасылыҡ ҡалды бөгөн. Умартасылыҡ беҙҙә кейендерә, туйындыра. Бал сезоны ғаилә бюджетына арыу ғына килем килтерә, тип әйтә алам. Умарта тотоу, бал ҡорто үрсетеү - ялҡауҙар эше түгел. Бының өсөн елкә кәрәк. Умартасылар - бик эшлекле халыҡ. Быны мин атайыма ҡарап та әйтә алам. Умартасылыҡ менән шөғөлләнеүсенең тыныс ултырған ваҡыты юҡ, һәр ваҡыт нимә менәндер шөғөлләнергә тура килә.

Етештергән балды һатыуға килгәндә иһә, минең үҙемдең даими һатып алыусыларым бар. Улар алдан уҡ шылтыратып, ҡасан бал айыртыуымды белешеп торалар. Тулайым алғанда, бер фляга бал 30 мең һумға төшә.

Мине шул борсой: ситтән алып килгән кавказ ҡорттарын тотоусыларға ҡаршы ниндәйҙер сара күреү кәрәк. Юғиһә, был бал ҡорттары беҙҙең уникаль башҡорт бал ҡорттарына ҙур зыян килтерә. Минең, мәҫәлән, 6 баш умартамды шулар баҫып алып үлтерҙе. Умарта эсенән бал урлайҙар ҙа, балһыҙ ҡалған башҡорт бал ҡорттары ҡырылып бөтә.

Миңә күп кешеләр, айырыуса тиңдәштәрем, умартасылыҡ һөнәре нескәлектәре тураһында һорау бирә. Ундай кешеләр гәзит уҡыусылар араһында тағы ла күберәктер. Умарта тоторға теләйһегеҙ икән, иң беренсе сиратта сыҙамлы булырға, икенсенән, донъя көтөргә тигән дәрт менән янырға, унан ҡала, күпмеләр дәрәжәлә финанс хәлле һәм һөнәри белемле булырға кәрәк. Финанс мәсьәләһенә килгәндә, хәҙер районда умартасылыҡ менән шөғөлләнергә теләгән кешеләргә лә аҡса бүләләр. Башлап ебәргәнсе 15 сутый ер ҙә етә. Умарта-рамдарға килгәндә, өлгө өсөн бер умарта тапһаң, таҡталарҙан эшләйһең дә алаһың. Мин дә тәүҙә умарта эшләй белмәй инем, өйрәнергә тура килде. Иң тәүҙә атайҙың ағас эшкәртеү станогында эшләнем, хәҙер үҙемдеке бар. Яйлап өйөлә инде донъя.

**Әғләм ШӘРИПОВ, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығының ғилми хеҙмәткәре, конкурстың судьяһы:** Мин солоҡсолар бәйгеһен баһаланым. Был бәйгенең маҡсаты беҙҙең боронғо кәсебебеҙ солоҡсолоҡто күрһәтеү. Күптәр ул хаҡта китаптан уҡып ҡына белә, уның нисек атҡарылғанын күҙ алдына ла килтерә алмай. Ә был бәйгелә иһә солоҡсоларыбыҙ барыһының күҙ алдында үҙҙәре ҡулланған эш ҡоралдары менән солоҡ эшләп күрһәтте. Тәғәрәп ятҡан ағастан умарта барлыҡҡа килгәнен күргәс, бәлки, күптәрҙә ошо кәсепте үҙләштереү теләге, ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килер, иң мөһиме, кемдәлер ошо кәсепте уйлап тапҡан тәбиғәт йәнле ата-бабалары менән ғорурланыу тойғоһо барлыҡҡа килер, тинек. Элек бындай ярыштар Бөрйән районында үткәрелә торғайны. Быйыл иһә республика кимәленә сыҡтыҡ. Был беҙҙең өсөн дә, республика өсөн дә ыңғай күренеш, тип иҫәпләйем. Бындай түмәр умарталарҙы беҙҙең ҡурсаулыҡ умартасылары күпләп эшләй һәм урманға алып барып ҡуя. Унда күстәр ҡунып, бал йыя, шунда уҡ ҡышлап сығалар. Ә солоҡсолар уларҙы тикшереп кенә тора. Кәсеп борон-борондан быуын-быуынға күсеп килә. Һәр бер атай үҙенең балалары араһынан ошо эшкә барымы булған, солоҡ эшен алып барырҙайын һайлап, шөғөлдөң нескәлектәрен өйрәткән. Сөнки урманды, ҡортсолоҡто яҡшы белеү һәр кемебеҙгә лә бирелмәгән. Бөрйән районында колхозлашыу осоронда ла ошондай кәсеп юҡҡа сыҡмаған, халыҡ уны ташламаған. Әлбиттә, ул саҡта килем алыу яғын уйламағандар. Ғөмүмән, ҡәҙимге умартанан айырмалы, солоҡсолоҡ бик үк килемле эш түгел. Түмәрҙе урманға алып барып ултыртаһың да, ҡорт үҙе килеп ҡунып, бал йыя башлай. Кеше ошондай умартанан йылына иң күбе 6-7 килограмм ғына бал ала. Ул тиклем генә бал менән табыш алып булмай. Шуға ла солоҡсолар өсөн саф табыш алам, аҡса эшләйем, тигән ниәт беренсе урында тормай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостандың иң күренекле солоҡсоһо, был ярыштарға судья итеп саҡырылған 72 йәшлек Әнүәр Дилмөхәмәтов тураһында үҙе бал ҡорто тураһында барыһын да белгән һәм уны фәнни яҡтан өйрәнгән, Башҡорт дәүләт аграр университетында 22 йыл уҡытҡан Ивнәй ағай Шафиҡов: "Солоҡсолоҡ буйынса Башҡортостанда иң күпте белгән кеше - Әнүәр Дилмөхәмәтов, мин әле лә ошо шөғөлдөң серҙәрен унан өйрәнәм",- тигәйне. Ысынлап та, умартасыларыбыҙҙың һәр береһе - уникаль, һәр кем ошо шөғөлдөң ҡабатланмаҫ ынйыһы. Улар араһында оҫталыҡ кимәлен билдәләй торған бөгөнгөләй конкурстар уҙғарылыуы бәйге булараҡ ҡына түгел, тәжрибә уртаҡлашыу майҙансығы булараҡ ҡиммәт.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ,**
**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

# БАШҠОРТОМДАН БАТЫР ЮҠ ИКӘН...

**1812 йылдың 12 июнендә Франция ғәскәрҙәре Рәсәйгә ҡаршы һуғыш башлай. Рус тарихсылары Беренсе Ватан һуғышы тип атаған был яуҙа рус, украин, белорус, Волга буйы һәм башҡа төбәк халыҡтарынан тыш, башҡорттар ҙа ҡатнашып, дошманды еңеүгә ҙур өлөш индерә. Уртаҡ Ватаныбыҙ һаналған Рәсәйҙе һаҡлап яу ҡырында ятып ҡалған һәм, Париж урамдарын айҡап, Елисей яландарында ҡурай тартып, дан-шөһрәт менән әйләнеп ҡайтҡан батырҙарыбыҙ бер ваҡытта ла халыҡ хәтеренән сыҡмаясаҡ.**



Наполеон Рәсәйгә баҫып ингәс, император Александр I халыҡтарға манифест менән мөрәжәғәт итә. Манифест һәм губернаторҙың Ватанды һаҡларға саҡырған яҙмаһы сиркәүҙәрҙә, мәсеттәрҙә, ауылдарҙағы йыйындарҙа һ. б. ерҙәрҙә уҡыла. Бынан һуң Башҡортостанда йәшәүселәрҙән күптәр ил сиген һаҡларға китергә теләк белдерә. Улар араһында, документтарҙан күренеүенсә, ситтән бер ниндәй ярҙам алмайынса ағалы-ҡустылы Әбделхалик һәм Нәзир Әбделмәмбәтовтар, йорт старшинаһы (бер нисә ауылдың башлығы) Әбүталип Абдрахманов үҙенең улы менән яуға китергә әҙер була.

1812 йылда Ырымбур губернаһының күп кенә өйәҙҙәрендә иген уңмай, ләкин аслыҡҡа һәм фәҡирлеккә ҡарамаҫтан, башҡорттар, казактар һуғышҡа үҙҙәренең кейем-һалымы, ҡоралдары менән бара. Шуныһы ла үҙенсәлекле: һуғыш ваҡытында башҡорттар һәм урыҫ казактары араһында һуғыштан ҡасыу кеүек күренештәр булмай.

1812 йылдың июль-октябрь айҙарында 18 башҡорт атлы полкы ойошторола. 1812 йылдың аҙағында һәм 1813 йылдың башында тағы ла 8 полк төҙөлә. 2 полк 1811 йылда уҡ барлыҡҡа килгән була. Шулай итеп, башҡорттар барлығы 28 полкты һуғышҡа оҙата. Башҡорттар йәшәгән һәр кантон йәки өйәҙ бер йәки өс полк биргән. Мәсәлән, Пермь, Екатеринбург, Красноуфимск башҡорттары - 20-се полкты, Ҡурған башҡорттары - 19-сы полкты, Троицк башҡорттары - 18-се полкты, минзәләнекеләр - 3-сөнө һәм 5-сенең бер өлөшөн, Бәләбәй һәм Бөгөлмә башҡорттары 4-се полкты һәм 5-се, 12-се, 20-се полктарҙың бер өлөшөн, Верхнеуральск башҡорттары - 14-се, 15-се полктарҙы, стәрлетамаҡтар 12-се һәм 13-сө полктарҙы әҙерләй. Атлы полк 500 ябай һалдаттан, ә командирҙар составы 30 кешенән (2 полк командиры, уларҙың береһе - башҡорт, икенсеһе - рус, 1 старшина, 5 яҫауыл, 5 йөҙ башы, 5 хорунжа, 1 мулла, писарь, 10 илле башынан) торған.

Французларға ҡаршы һуғышыусы полктарҙан тыш, 12 мең башҡорт Рәсәйҙең көнсығыш сигендә хеҙмәт итә - һыҙыҡ һағы хеҙмәтен үтәй. 1811-1813 йылдарҙа башҡорт кантондары Наполеон ғәскәренә ҡаршы һәм көньяҡ-көнсығыш сикте һаҡлауға 27 меңләп яугир ебәрә.

1812 йылдың 26 августында Бородино һуғышында французлар бик ҙур ауырлыҡтар менән Раевский батареяһын яулап ала. Генерал Ермолов, Өфө пехота полкының бер батальоны һәм Ырымбур драгун полкы менән ҡаршы сығып, батареяны ташлап ҡасып барған частарҙы туҡтата һәм кире бороп, дошманға ташланалар. Раевский батареяһы дошмандан азат ителә.

Михаил Кутузов, дошмандың иғтибарын ситкә йүнәлтеү һәм ғәскәрҙәренең хәлен еңеләйтеү маҡсатында, казак ғәскәрҙәренә дошмандың һул флангыһына һәм тылына һөжүм итергә бойороҡ бирә. Платов менән Уваровтың атлылары (1-се башҡорт полкы ла улар сафында була) Яңы Смоленск юлы буйындағы Валуево ауылы эргәһендә французларҙың тылына сығып, француз ғәскәренең һул флангыһында ығы-зығы тыуҙыра. Наполеон төп йүнәлештән алып, уларға ҡаршы 28 мең кешелек ғәскәр ебәрергә мәжбүр була. Рус ғәскәрҙәренең ошо ынтылышы Бородино һуғышындағы һынылышта ыңғай роль уйнай. Наполеон флангылағы ғәскәр менән мәшәҡәтләнгән арала, Кутузов төп ғәскәрен Бородино һуғышына әҙерләп өлгөрә.

Рус ғәскәренең яуап һөжүмгә әҙерләнгән осоронда башҡорттар, мишәрҙәр, типтәрҙәр, Ырымбур һәм Урал казактары Наполеон ғәскәренең тылында һуғышҡан атлы отрядтар сафына инә. Ә 1812 йылдың сентябрендә урҙа һанап үтелгән полктар полковниктар Ефремов, Ҡудашев, Давыдовтарҙың махсус ойошторолған партизан отрядтарында булалар.

Октябрь айы башында, французлар Мәскәүҙе ташлап китергә мәжбүр булғас, рус ғәскәрҙәре араһында башҡорт полкынан бер нисә йөҙ һәм 1-се мишәр полкы Рәсәйҙең баш ҡалаһына инә. 1-се мишәр полкы Мәскәүҙә ҡалдырыла һәм 1814 йылда һуғыш бөткәнгә тиклем гарнизон хеҙмәтен үтәй.

Мәскәүҙе азат итеү өсөн барған һуғыштар тураһында шул йылдарҙа сығарылған "Любизар" исемле башҡорт халыҡ йырында бик яҡшы әйтелә:

*Французлар килеп ингән*
*Мәскәү тигән ҡалаға.*
*Беҙҙең ғәскәр ҡыҫып алғас,*
*Сығып ҡасты далаға.*
*Любезники, любизар,*
*Маладис, маладис!*
*Наполеонға тәхет кәрәк,*
*Уҙ еренә һыймаған.*
*Мәскәүҙәргә килеп ингәс,*
*Ул да үҙе һынаған.*
*Французлар танынылар*
*Әрәсәйҙә үҙҙәрен,*
*Урыҫ, башҡорт ҡыҫмаҡлағас,*
*Таба алмайҙар эҙҙәрен.*

1812 йылдың октябренән алып рус ғәскәрҙәре һөжүмгә күскәс, Башҡортостандан килгән атлы полктар Наполеондың хәрби көстәрен ҡамау һәм юҡ итеүҙә әүҙем ҡатнаша. Малоярославец районында 1-се типтәр полкы батырлыҡ күрһәтә һәм быны өсөн уның командиры майор Тимеров 4-се дәрәжә Изге Владимир ордены, ә прапорщик Монасипов менән зауряд-хорунжа Ибраһимов 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены менән бүләкләнә.

Өс башҡорт һәм Урал полкы генерал Витгенштейн корпусында була. Улар Петербургҡа барған дошмандың юлын быуа. 1812 йылдың ноябрендә бер нисә башҡорт полкы Волга буйы ополчениеһы сафында Украинаны һаҡлай.

Дошманды эҙәрләп ҡыуғанда башҡорт һәм казактар бик ҡыйыу эш итә. Уларҙы йыш ҡына разведка яһау өсөн тәрән тылға ташлайҙар. Ырымбур губернаторы Волконскийға рус ғәскәрҙәренең еңеү артынан еңеү яулауы һәм французларҙың ҡасыуы хаҡында хәбәр иткәндә Кутузов былай ти: "Һеҙ күҙ алдына ла килтерә алмайһығыҙ, Ваше сиятельство, нисек итеп һәр рус һалдаты ҡасыусы дошманды туҡмап, киңәнес алғанын, батырлыҡ ҡылғанын. Шулай уҡ казактар һәм башҡорт полктарының уларҙы ҡырғанын!"

Парижға тәүгеләрҙән булып аяҡ баҫҡан 1-се, 2-се, 5-се, 8-се, 9-сы, 12-се, 13-сө, 14-се, 15-се башҡорт полктары һәм 2-се типтәр, 2-се мишәр, 8-се Ырымбур казактары полктары яугирҙары "За взятие Парижа 19 марта 1814 года" тигән көмөш миҙал һәм ордендар менән бүләкләнә. Шулай уҡ 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан бөтә яугирҙарға ла "В память войны 1812 года" тигән көмөш миҙал тапшырыла.

Беренсе Ватан һуғышы халыҡ хәтеренә мәңгелеккә һеңеп ҡала һәм ауыҙ-тел ижадында киң сағылыш таба. Уларҙың байтағы хәҙер ҙә халыҡ телләнән төшмәй. Улар араһында шул һуғыштың ҡаһарман батыры Ҡаһым түрә (йөҙ башы Ҡаһым Мырҙашев, хәҙерге Стәрлетамаҡ районы Айыусы ауылында тыуып үҫә.- **Авт.**) легендаһы һәм йыры халыҡта айырыуса киң таралған. Үҙҙәренең 1812 йылғы һуғышта ҡатнашыуы менән башҡорттар һәр саҡ ғорурланған, батырҙарының даны менән һоҡланған. Киң билдәле "Колой кантон" йырында:

*Был империяны самаланым -*
*Башҡортомдан батыр юҡ икән,-*

тип хаҡлы әйтелгән.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# ЫРЫУҘАРҘЫҢ...

## өс тағаны

**Ҡыпсаҡ ырыуҙары һәм төп башҡорт ҡәбиләләре араһындағы мөнәсәбәттәр VIII быуат башында уҡ башлана.**

Ул осорҙа ҡыпсаҡтар хазар ырыуҙары менән берләшеп, башҡорт, бәшәнәктәргә (ҡайһы белгестәр уларҙы, башҡорт-бәшәнәк союзы, ти) ҡаршы сыға. Һуңғылары ҡыйралыуға дусар була. Бынан һуң башҡорт-бәшәнәктәрҙең бер өлөшө Европа тарафтарына китә һәм унда хәҙерге мадъярҙар этногенезының формалашыуында ҡатнаша. Ә ҡыпсаҡтар бәшәнәктәрҙе ҡыҫып, әкренләп яулап алған биләмәләргә - хәҙерге Ҡаҙағстандың төньяҡ өлөшөнә килеп ултыра башлай. Тора-бара улар төп башҡорт ырыуҙарының ерҙәренә лә яҡынлаша. Әммә ҡыпсаҡтарҙың Көньяҡ Уралға күпләп килеү осоро (уны миграцияның икенсе тулҡыны тип тә йөрөтәләр) Алтын урҙа дәүеренә тура килә.

Был нимә менән бәйле һуң? Әгәр ҙә далалағы ниндәйҙер үҙгәрештәр, яулап алынған ерҙәр, күсенеүҙәр тураһында һүҙ йөрөтәбеҙ икән, беҙ быны сауҙа үҙәктәре менән бәйләргә тейешбеҙ. XIV быуатта башҡорттарҙың сәскә атҡан осоро була. Быға тиклем һүнеп ҡалған ҡалалар яңынан тергеҙелә. Сауҙа үҙәктәре тап башҡорт ерҙәрендә, шул иҫәптән Өфөлә барлыҡҡа килә. Шуға күрә лә тап ошо ваҡытта ҡыпсаҡтар төп башҡорт ырыуҙары биләмәләренә әүҙем күсенә башлай.

Табындар хаҡында һүҙ йөрөткәндә, тарихсылар бер уртаҡ фекергә килә: табындар сығышы менән - төрки ырыуҙарынан, тамырҙары Урта Азияла, Алтайҙа көн күргән боронғо табын-уйшун ҡәбиләләренә барып тоташа. Көньяҡ Уралға килеп етер алдынан улар оҙон юл үтә. Башта Һырдарья, аҙаҡтан Иртыш буйҙарына күсенәләр. Табындарҙың башҡорт ҡәбиләләре менән бәйләнешкә ингән ваҡытын беҙ Майҡы бей осоро менән бәйләйбеҙ. Сыңғыҙхан сиреүендәге юлбашсыларының (хәҙерге тел менән әйткәндә, генералдарының) береһе булараҡ, Майҡы бей башҡорт биләмәләрендә айырым олоҫ ала. Ошонан һуң табындар урындағы ырыуҙар менән тығыҙ бәйләнешкә инә.

Урта быуаттағы миграция күренеше - күптәребеҙ күҙ алдына килтереүенсә, халыҡтың бер урындан икенсе урынға күсеп ултырыуы түгел, ә бик оҙайлы осорға һуҙылған, сәйәси, мәҙәни юҫыҡҡа ла ҡағылған ҡатмарлы хәрәкәт. Ғәҙәттә, күсенә барған төп ырыу үҙе тирәләй башҡа ырыуҙарҙы туплап килә, уларҙы үҙенә буйһондороп, үҙ исемен, тамғаларын бирә. Урындағы төп башҡорт ырыуҙары, шулай уҡ ҡыпсаҡтар нигеҙҙә табындар алып килгән элементтарҙы үҙләштерә. Тап табындарҙың сәйәси-иҡтимағи ҡараштары төп урын алып, дөйөм башҡорт халҡының йәшәйеш принциптарын формалаштыра. Дөрөҫ, боронғо башҡорт ҡәбиләләренең донъяуи ҡараштары мифик образдар рәүешендә һаҡланғаны билдәле. Әммә сәйәси, хоҡуҡи институттар тәү сиратта табын ырыуҙары йоғонтоһонда үҫешә.

Тел үҙенсәлектәренә ҡағылышлы фараздар шулай тәҫмөрләнә: бәлки, монголдар дәүеренә тиклем боронғо башҡорттар төрки ғаиләһенең болғар төркөмөндә һөйләшкәндер. Табындар менән ҡыпсаҡтар килгәс, ҡыпсаҡ төркөмөнә ҡараған телдәр таралып китә. Башҡорт һәм татар телдәренең оҡшашлығы тап Алтын урҙа дәүеренең йоғонтоһона бәйле. Сыуаштарға Алтын урҙа дәүере ҡағылмай ҡала, ҡыпсаҡлашыу осоро уларҙы урап үтә. Шуға ла сыуаш теле боронғо болғар теле рәүешендә һаҡланып ҡалған, тигән фараз бар.

Шулай итеп, башҡорт халҡының формалашыуы төрлө этно-мәҙәни процестар йоғонтоһонда, билдәле бер шарттар тыуҙырылғас (сауҙа үҙәктәре, аҫабалыҡ институты) ғәмәлгә ашырыла.

**Юлдаш ЙОСОПОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Аҙағы. Башы 34-се һанда).**

*✓ Беҙгә алдағы йылдарҙа башҡорт халҡының рухи, сәйәси, мәҙәни көсөн туплап, тыуасаҡ ҡатмарлыҡтар эсендә үҙебеҙҙең төп йүнәлешебеҙҙе билдәләү юлына баҫыу кәрәк буласаҡ.*



# БАШҠОРТ

## Ул - Аллаһы Тәғәләгә инанып,

**Башҡортостан Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан Республикаһының әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителеүселәр араһында милләтебеҙҙең арҙаҡлы улдары: шағир, филология фәндәре докторы, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры Рәшит ШӘКҮР ("Ыласындар оса бейектә" китабы өсөн) менән Башҡортостан телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһының редакция етәксеһе Салауат ХӘМИҘУЛЛИН дә ("Тарихи мөхит" телевизион проекты өсөн) бар. Уларҙың әңгәмәһе тарих, заман сәйәсәте, милләт яҙмышы, дин, тел мәсьәләләре хаҡында бара.**

**▸ Һуңғы ваҡытта кешелектең тарихи-сәйәси донъяһында ике тенденцияны билдәләргә мөмкин булыр ине. Уларҙың береһе - неоколониализм күренеше, йәғни үткән быуаттарҙа яуланған илдәрҙең, милләттәрҙең яулаусыларының үҙҙәренең дәүләтен, илен тыныс юл менән баҫып алыу. Хәҙер африканлы йә мосолман кешеһе булмаған Европа дәүләтен атауы ла ҡыйын. Икенсе тенденция - тарихи ваҡыттың тиҙләнеше. Әйтәйек, таш быуат менән бронза, бронза быуаты менән атом быуаты алмашыныу өсөн тиҫтәләгән меңәр йыл кәрәк булһа, хәҙер ундай эволюциялар ҡулдағы бармаҡтар һаны менән иҫәпләрлек йылдар эсендә барлыҡҡа килә. Хәҙер дәүерҙәрҙең арауығы ғына ҡыҫҡарып ҡалмай, ижтимағи-сәйәси процестар ҙа күҙ йомоп асҡан арала ғәмәлгә ашырыла. Һеҙ ошо ике күренеш хаҡында уйланғанығыҙ бармы? Бәлки, был тенденцияларҙы һәм процестарҙы икенсерәк итеп күрәһегеҙҙер?**

**С. Хәмиҙуллин:** Колониялаштырыуҙың яңы формаһына килгәндә, бында "алтын миллиард" концепцияһы хаҡында ла һүҙ алып барырға мөмкин булыр ине. Колониялаштырыуҙың яңы формаһы Рәсәйгә лә ҡурҡыныс менән янай. Әгәр ҙә уның ядро ҡалҡаны булмаһа, күптәр беҙҙе теҙ сүктерер ине. Американдар Себерҙең һәм Алыҫ Көнсығыштың тик бер генә ил ҡарамағына ҡалдырылыуына күптән үҙ дәғүәһен белдерә. Әгәр ҙә Рәсәй тиҫтә йыл эсендә тиҙләтелгән модернизация үткәрмәһә, уны ядро ҡоралы ғына һаҡлай алмаясаҡ. Дөрөҫ, тарихи ваҡыт тиҙ үтә, ә Рәсәй ошо ваҡытҡа ярашлы үҫешеп өлгөрә алмай. Уның алдынғы илдәрҙе ҡыуып етерлек өмөттәре кәмегәндән-кәмей бара. Күптәр башҡалар менән тигеҙләшеүҙең юлын Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына инеүҙә күрә. Мин шәхсән был ойошмаға инеүҙән фәтүә күрмәйем. Рәсми булмаған статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, баш ҡалабыҙ Мәскәүҙә урыҫтар дөйөм халыҡ һанының 31 процентын ғына тәшкил итә. Был нимә хаҡында һөйләй? Тимәк, ошо быуат уртаһында Рәсәй ҡораллы көстәренең төп өлөшө урыҫ булмаған халыҡ вәкилдәренән торасаҡ. Был, үҙенә күрә, бик сәйер күрһәткес.

**Р. Шәкүр:** Салауат әйткәндәр Рәсәйҙә йәшәгән барлыҡ милләттәр өсөн дә уртаҡ проблемалар. Шулай уҡ милләт һан яғынан аҙыраҡ була барған һайын, уның алдында торған проблемаларҙың арта барыуы билдәле. Быйдай ваҡытта беҙ үҙебеҙҙең тарихи тәжрибәбеҙгә таянып, киләсәгебеҙ хаҡында фекер йөрөтөргә дөрөҫ йүнәлеш билдәләй белергә тейешбеҙҙер. Был йәһәттән "Урал батыр" эпосында әлеге кеүек ҡатмарлы ситуациялар булғанлығына ишара яһала. Тарихтағы ошондай ҡатмарлы һәм ауыр дәүерҙәрҙә төрлө ырыу-ҡәбиләләр бергә ойошоп, дәүләтселек булдырған. Улар ошо еребеҙҙең бер бөтөнлөгөн һаҡлап ҡалыу маҡсатын ҡуйған. Икенсенән, Алтын Урҙа, Рәсәй дәүерендәге тарихыбыҙҙан да бик күп һабаҡтар алырға була. Тарихтың бөтөн ҡатмарлы, хәүефле дәүерҙәрендә лә, геосәйәсәттең бик күп тулҡынлы дәүерҙәрендә лә беҙҙең халыҡ үҙенең маҡсатын дөрөҫ итеп билдәләй алған һәм шул маҡсаттарына өлгәшкән. Әлбиттә, Рәсәй дәүерендә күп юғалтыуҙар аша үткәнбеҙ. Бәлки, унда беҙгә һабаҡ алыр хаталар күберәктер. Сөнки ике быуат буйына ер-һыуҙы һаҡлайым тип көрәшеп, халҡыбыҙҙың күпселек өлөшөн юғалтыуы үҙен аҡлап бөтмәй торғандыр ул. Был бигерәк тә Ҡараһаҡал ихтилалын күҙ уңында тотҡанда асыҡ күренә.

Үткән быуаттың 90-сы йылдарында ла беҙҙә аҙмы-күпме хәүефле мәлдәр булып алды. Беҙгә ҡаршы ойошҡан көстәр һәр ваҡыт беҙҙең һүҙҙе аҫта ҡалдырырға, йәғни башҡорт халҡының хоҡуҡтарын һанға һуҡмаҫҡа, уның намыҫына ҡағылырға, үҙаллылығына ҡаршы торорға, хатта 1918 йылғы ҡайһы бер лозунгыларҙы ҡабаттан ҡаҙып сығарырға маташты. Беҙ шул ваҡытта психологик яҡтан бик ҡатмарлы хәлдә тороп ҡалдыҡ. Әгәр ҙә шул саҡта беҙ шундай көстәрҙең яуызлығына яуызлыҡ менән яуап бирә башлаһаҡ, бик күп хаталар яһаған булыр инек. Быйдай шарттарҙа беҙ халҡыбыҙҙың һәр бер вәкилен һаҡлап эш итергә тырышып, дөрөҫ эшләнек тип уйлайым.

**▸ Тарих беҙгә һәр ваҡыт тик ғибрәт кенә лә булмаған бит, Рәшит ағай. Уның бит өлгө булырлыҡ күренештәре лә байтаҡ. Шулай түгелме, һеҙҙең өсөн ул ниндәй күренеш йә мәл?**

**Р. Шәкүр:** Беҙҙең тарихта иң ҡиммәтле тәжрибә - ул XIX быуаттың икенсе яртыһы. Дөйөм Урал-Волга буйы мәғрифәтселеге - ул бер нәмә, ә бына шунда башҡорт мәғрифәтселегә лә бар. Уны бер кем дә дөйөм мәғрифәтселектән айырып күрһәтмәй. Уның башында Зәйнулла ишан Рәсүлев, уның фекерҙәштәре Аҡмулла, Ғабдулла Сәиди, Ғатаулла ишан һәм башҡалар торған. Бына ошо беҙҙең башҡорт мәғрифәтселеге һынылышлы мәлдә халыҡты һаҡлап ҡалыуҙың һәм уны үҫтереүҙең иң ышаныслы юлдарын һайлай белгән. Шуның һөҙөмтәһендә 1917 йылда башҡорт милләте иң беренсе булып күтәрелеп, үҙ автономияһын төҙөрлөк кимәлгә еткән. Был донъя тарихының уникаль күренеше. Был саҡта ҡаҙаҡтар ҙа башҡорт милли хәрәкәтенең артынан эйәргән.

Башҡорт мәғрифәтселеге Өфөләге һәм Ҡаҙандағы мәҙрәсәләрҙә алға һөрөлгән мәғрифәтселек түгел. Ул бөтөнләй башҡа төрлө - башҡорт милли мәғрифәтселеге. Ул - Аллаһы Тәғәләгә инанып, милләтте яҡлау һәм һаҡлау институты. Башында Зәйнулла ишан Рәсүлев торған башҡорт мәғрифәтселеге - барлыҡ Урал-Волга, Ҡаҙағстан, хатта Урта Азия сиктәрендә өлгө булырлыҡ мәғрифәтселек. Быны әле беҙгә бер кем дә асыҡлап күрһәткәне һәм аңлатҡаны юҡ. Ни өсөн, мәҫәлән, Аҡмулланы тоталар ҙа өс халыҡҡа бүлгеләргә маташалар?



*Беҙҙең тарихта иң ҡиммәтле тәжрибә - ул XIX быуаттың икенсе яртыһы. Дөйөм Урал-Волга буйы мәғрифәтселеге - ул бер нәмә, ә бына шунда башҡорт мәғрифәтселеге лә бар. Уны бер кем дә дөйөм мәғрифәтселектән айырып күрһәтмәй. Уның башында Зәйнулла ишан Рәсүлев, уның фекерҙәштәре Аҡмулла, Ғабдулла Сәиди, Ғатаулла ишан һәм башҡалар торған. Бына ошо беҙҙең башҡорт мәғрифәтселеге һынылышлы мәлдә халыҡты һаҡлап ҡалыуҙың һәм уны үҫтереүҙең иң ышаныслы юлдарын һайлай белгән. Шуның һөҙөмтәһендә 1917 йылда башҡорт милләте иң беренсе булып күтәрелеп, үҙ автономияһын төҙөрлөк кимәлгә еткән. Был донъя тарихының уникаль күренеше. Был саҡта ҡаҙаҡтар ҙа башҡорт милли хәрәкәтенең артынан эйәргән.*

Сөнки башҡорт мәғрифәтселеге, халыҡсан рухи-мәҙәни күренеш булараҡ, күрше төрки халыҡтарының барыһын да үҙ артынан эйәрткән. Евразия әле булһа гуманизм принциптарын алға һөргән шундай уҡ мәғрифәтселеккә һыуһай. Беҙҙең бөгөнгө сәйәсәттәге иң кәрәкле ролебеҙ ҙә тап ошоға ҡайтып ҡала. Тимәк, беҙгә алдағы йылдарҙа башҡорт халҡының рухи, сәйәси, мәҙәни көсөн туплап, тыуасаҡ ҡатмарлыҡтар эсендә үҙебеҙҙең төп йүнәлешебеҙҙе билдәләү юлына баҫыу кәрәк буласаҡ. Тарихи бурысыбыҙҙы үтәү - милләтебеҙҙе һаҡлап ҡалыуға һәм үҫтереүгә өлгәшеү ул.

**▸ Рәшит ағайҙың хеҙмәттәрендә халҡыбыҙ составында 120 самаһы ырыу барлығы билдәләнә. Ә беҙҙең милләттең барлыҡҡа килеү, этногенез мәсьәләләрен ҡараһаҡ, тап ошондай, хәҙерге кеүек донъяның ҡатмарлы дәүерҙәрҙәге ваҡиғалары һөҙөмтәһендә беҙҙең милләт ойошҡан, формалашҡан бит. Йәғни төрлө тәбиғи катаклизмдар, һуғыштар һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында ике ҡитғаның төрлө тарафтарынан Уралтауға ағылған ырыу-ҡәбиләләр ундағы төп ҡорға - милләттең ядроһын тәшкил иткән ырыуҙарға килеп һыйынған. Минеңсә, беҙ шундай тарихи ситуацияға кире әйләнеп ҡайтабыҙ кеүек...**

**С. Хәмиҙуллин:** Беренсенән, әгәр ҙә башҡорт халҡы этногенезын бер нисә этапҡа бүлһәк, беҙҙең милләт составындағы ырыу-ҡәбиләләрҙең яртыһынан күберәген Алтын Урҙанан сығыусылар тәшкил итә. Улар бынан ни бары биш-алты быуат элек кенә башҡорт халҡына ҡушылған. Ә уға тиклем был ерҙәрҙә башҡорт милләтенең ядроһын тәшкил итеүсе ырыуҙар йәшәгән. Беҙ бында нимәгә иғтибар итәбеҙ? Донъяны тик баҫып, көс менән яулап алырға күнеккән Алтын Урҙа ырыуҙарының башҡорт милләтен ҡабул итеүендә ядроның ниндәй көскә эйә булыуы күренә. Әйтәйек, болғарҙар менән бындай хәл килеп сыҡмай, улар юҡҡа сыға. Шулай итеп, хәҙерге башҡорттар бәшәнәктәрҙең, кимактарҙың, Волга булғарҙарының, һуңғы һундарҙың, Йәнсәй ҡырғыҙҙарының замандаштары. Хәҙер был халыҡтарҙың береһе лә донъяла ҡалмаған. Уларҙың араһынан башҡорттар үҙ исемен генә һаҡлап ҡалмаған, киреһенсә, үҙенең составына күпме ырыуҙарҙы ҡушып, XVI-XVII быуатҡа донъя аренаһына яңыртылған башҡорт милләте булып аяҡ баҫҡан.

Бөгөн иһә шул милләт ике өлөшкә бүленгән. Үҙҙәрен этник башҡорт тип таныған көньяҡ һәм көнсығыш башҡорттар һәм ике төрлө милли үҙаң йоғонтоһон кисереүсе төньяҡ-көнбайыш башҡорттары. Милләтебеҙ алдында әле торған иң ҙур проблема - уның берҙәмлеген аяҡҡа баҫтырыу.

Бар донъяла һәм Рәсәйҙә Ислам дине факторы ныҡ үҫешә. Бигерәк тә Рәсәйҙә һәм Европала йылдан-йыл, көндән-көн мосолмандар артҡандан-арта бара һәм быға ҡаршы бер кем дә, бер нәмә лә эшләй алмай. Ошондай шарттарҙа беҙҙең республикала үҙебеҙҙең ысын мәғәнәһендә юлбашсы булырлыҡ мөфтөйөбөҙ булмауы арҡаһында (Нурмөхәмәт хәҙрәтте мин ихтирам итәм) Ситтәр йоғонтоһо көсәйә, был үҙ нәүбәтендә милләтебеҙҙең ике өлөшкә бүленгән арауыҡты тағы ла алыҫайта. Ә дин юлынан киткән йәштәребеҙ иһә, кем артынан эйәрергә белмәйенсә, төрлө секталарға китә. Секталарға китеүселәргә иһә шундуҡ реакцион ваһһаб ярлыҡтары тағыла.

**Р. Шәкүр:** Һәр бер халыҡтың үҙенең дини эшмәкәрлеген структураһы булырға тейеш. Әйтәйек, ерле халыҡ телендә вәғәз уҡыу мәсьәләһе лә шуға инә. Мәктәптәрҙә туған телде һаҡлау буйынса беҙ эш алып барабыҙ, ә бына дини эшмәкәрлектә лә туған телдең үҙ урыны булыуы мотлаҡ. Беҙ бөгөн күпселек мәсеттәребеҙҙә башҡортса вәғәз тыңлай алмайбыҙ.

**С. Хәмиҙуллин:** Ә хәҙер беҙгә нисек итергә һуң? Беренсенән, беҙгә үҙебеҙҙең башҡорт Исламы, үҙебеҙҙең ысын мәғәнәһендәге Башҡортостан Республикаһы Дини идаралығы һәм унда үҙебеҙҙең башҡорт имамдары эшләүе кәрәк. Тик шул осраҡта ғына башҡорт кешеһе үҙенең милли сығышынан оялмаған һәм ҡурҡмаған мосолман була аласаҡ. Ошоно эшләмәйенсә тороп, беҙҙең бер эшебеҙ ҙә алға бармаясаҡ. Әйтәйек, ни өсөн татарҙарҙың үҙҙәренең "милли сиркәүен" булдырырға хоҡуғы бар, ә башҡорттарҙың бындай хоҡуғы юҡ һуң? Элекке

✓ *Ысын мәғәнәһендә ҡурайҙа уйнап өйрәнер өсөн төүшарт - башҡорт рухлы булыу, ә быныӊ үҙ нәүбәтендәге төүшарты - үҙ милли асылыңды, тарихыңды белеү. Бына шундай мөғжизә ул ҡурай.*

# МӘҒРИФӘТСЕЛЕГЕ...

## милләтте яҡлау һәм һаҡлау институты

СССР составындағы барлыҡ милләттәрҙең дә "милли сиркәүе" бар, тик башҡорттарҙыҡы ғына юҡ. Ни өсөн?

**Р. Шәкүр:** Дини йәһәттән ҡарағанда был шулай, ә сәйәси йәһәттән беҙҙең барыбыҙ өсөн дә күҙ терәп торған Башҡортостаныбыҙ бар. Хәҙер, суверенитет ваҡытында яулап алып та, бара-тора юғалтҡан хоҡуҡтарыбыҙҙы яңынан ҡайтарып алыу, ерҙәребеҙҙе һатыуҙы туҡтатыу - көнүҙәк мәсьәләбеҙ.

**▸ Тарих тағы ҡабатлана. Беҙ киренән тарихҡа ҡайтып, элекке кеүек үк ҡаршылыҡтарҙы үтергә, шундай уҡ киҫерештәрҙе кисерергә мәжбүр ителгән кеүекбеҙ. Шағир әйтмешләй, Рәсәйҙе аң менән аңлап, аршин менән үлсәп кенә бөтөрөрлөк түгел шул. Миҫалға Иван Грозныйҙың Ҡаҙанды алған осорон ғына алайыҡ...**

**С. Хәмиҙуллин:** Урыҫ подданствоһын ҡабул итеү, беҙҙең ҡайһы бер тарихсылар яҙғанса, шыма ғына бармаған. Мәҫәлән, башҡорттарҙың Ҡаҙанды яҡлап һуғышыуы хаҡында тарихи документтар бар. Шул уҡ ваҡытта Ҡаҙан ханлығының татар ханлығы булмағанлығы ла мәғлүм тарихҡа. Ҡаҙан ханлығы Алтын Урҙа сыңғыҙсыларының ханлығы булараҡ барлыҡҡа килә. Башҡорттарҙың ҙур өлөшө Нуғай ханлығына ҡарай, ә Нуғай ханлығы 1557 йылда үҙе урыҫ подданствоһын ҡабул итә. Был ханлыҡҡа ҡараған башҡорттар, ханлыҡтың көсһөҙләнгәнен күреп, үҙҙәре туранан-тура Мәскәү кенәзлеге менән килешеү төҙөй. Ә Себер юлы башҡорттары һуңғы сиккә тиклем Себер ханы Күсем яҡлы була, йәғни Мәскәүгә баш эймәй.

**▸ Генетиктарҙың гаплотөркөм буйынса сенсацион асышына ярашлы, башҡорттар Евразияның иң боронғо халыҡтарынан һанала. Был асыш беҙгә бөгөн ғәмәли йәһәттән нимә бирә тип уйлайһығыҙ?**

**С. Хәмиҙуллин:** Был беҙгә, аяғүрә баҫып, ошо ергә тулы хоҡуҡлы булыуыбыҙ хаҡында белдереү яһарға мөмкинлек бирә. Фән тарафынан дәлилләнгән генетик анализдарға таянып, беҙ, хәҙерге башҡорттар ошо ерҙә таш быуаттан бирле йәшәй, тип әйтә алабыҙ. Әлбиттә, улар ул ваҡытта башҡорт тип аталмағандыр, әммә генетик яҡтан беҙ таш быуаттан алып ошонда йәшәйбеҙ. Беҙ ошо ерҙә иң боронғо, Шүлгәнташты өйө итеүсе халыҡ.

**Р. Шәкүр:** Ядро иң төп, иң ҙур көстө аңлата, ә башҡорттар шул ядроны тәшкил итә. Беҙ күршеләребеҙҙән ҡайһы яғыбыҙ менән айырылып торабыҙ? Улар баҫып алыу, территорияны киңәйтеү, мәҙәниәтте үҙләштереү, бүтән халыҡтарҙы йотоу маҡсаты менән йәшәй. Ә беҙ һәр ваҡыт үҙебеҙҙе һаҡлау менән мәшғүлбеҙ. Шуға күрә лә беҙҙә бер ниндәй ҙә агрессия юҡ. Ошо ядро булғаны өсөн дә Көньяҡ Уралда бүтән халыҡтар ойошоп йәшәй ала. Беҙҙең рухиәт бына шуға хеҙмәт итә. Шуға күрә лә беҙ үҙебеҙҙең яҙмышҡа хәүеф тыуҙырыусы көстәргә ҡаршы тора алабыҙ.

**▸ Интернет бөгөн башҡорт милләте тураһында негатив мәғлүмәт менән тулған. Беҙгә төрлө яҡтан бысраҡ ташларға тырышһалар, беҙ шунда уҡ: "Юҡ, беҙ улай түгелбеҙ, ә бына былайбыҙ, данлы тарихыбыҙ бар, яугир халыҡбыҙ, моңло ҡурайыбыҙ, иҫ киткес йырҙарыбыҙ бар", - тип аҡланырға тотонабыҙ ҙа, шул бысраҡты битебеҙгә һылаған кеүекбеҙ. Беҙгә, ғөмүмән, аҡланырға, бындай һүҙҙәргә иғтибар итергә кәрәкме? "Эт өрә, бүре йөрөй" ти халыҡ мәҡәле. Беҙгә ҡаршы сығып, үҙҙәренә мәрәй йыйырға теләүселәрҙе лә аңларға була, улар быныӊ менән асыу ҙа сығара. Ни өсөн үҙебеҙҙең мәртәбәне онотабыҙ һуң?**

**С. Хәмиҙуллин:** Билдәле кинорежиссер Никита Михалков: "Әгәр ҙә һәр бер эттең өрөүенә иғтибар итә башлаһаң, бер ваҡытта ла өйөңә ҡайтып етә алмаҫһың. Ә казактың маҡсаты ниндәй: өйөнә ҡайтып етеүме, әллә эттәр менән булыуы?" - тигән. Беҙгә бысраҡ ташларға маташыусылар билдәле программа буйынса эш итә, йәғни быныӊ менән беҙҙе үҙҙәренең ҡурайына бейетергә тырыша. Ә башҡаның ҡурайына бейеүсенең үҙенең маҡсаты булмай. Тап шуның өсөн дә беҙ һәр ваҡыт аҡланырға мәжбүр ителеп, ундайҙарҙың ихтыярына биреләбеҙ генә. Тимәк, беҙгә үҙаллы эшмәкәрлек итеп, уларҙың һүҙенә иғтибар итмәҫкә кәрәк. Быныӊ юлы яп-ябай: беҙгә үҙебеҙҙең эшмәкәрлек программаһы кәрәк. Беҙгә күптән инициативаны үҙебеҙҙең ҡулға алырға ваҡыт. Ундай инициативаны мин сәүек эттәрҙең барлығына бөтөнләй иғтибар итмәйенсә, үҙебеҙҙең етди эштәр менән шөғөлләнә башлауҙа күрәм. Әйтәйек, Хөсәйенбәк, Турахан кәшәнәләренә мемориаль комплекс төҙөргә тотоноу. Кәрәкле һәм етди эш менән шөғөлләнгән кешене уның тураһында Интернетта, ваҡытлы матбуғатта нимәләр яҙылыуы бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай. Ә беҙҙең милли ойошмаларҙың күп ваҡыты сәүектәрҙең төрлө бысраҡ мәҡәләләренә аҡланыу справкалары яҙыуға китә. Ә бит сәүектәр беҙ етди һәм кәрәкле эштәр менән шөғөлләнә башлауҙан ҡурҡып, иғтибарыбыҙҙы ситкә йүнәлтә. Беҙ иһә, быға етди мәсьәлә тип ҡарап, күтәрелеп сығып аҡлана башлайбыҙ.

**Р. Шәкүр:** Дөрөҫ, беҙ һәр бер эттең өрөүенә иғтибар итергә тейеш түгелбеҙ, әммә ҡайһы бер сығыштарға яуап бирергә кәрәктер, тип иҫәпләйем. Ләкин унда аҡланыу түгел, ә концептуаль фекер үтеүе мотлаҡ. Бер миҫал килтереп кенә үтәм. "Истоки духовности" тигән китапта мин "Татарстан башҡорттары" тигән очерк яҙҙым. Мин унда, 1897 йылғы ревизия материалдарына таянып, ул территориялағы башҡорттарҙың һанын килтерҙем. 1920 йылда Татарстанда 350 мең башҡорт йәшәй. Шунан сығып ҡарағанда, хәҙерге ваҡытта Татарстандың 20-нән ашыу районында 500-600 мең башҡорт татар булып яҙылып йөрөүен билдәләнем. Китап сыҡты, таралды, әммә Татарстан ғалимдары бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, ти халыҡ мәҡәле. Минеңсә, факттар менән шулай эш итергә кәрәк. Әлбиттә, бындай нигеҙләү күп көс һәм ваҡыт талап итә, ә фальсификация еңелерәк бирелә, сөнки унда күрергә теләгәненде дөрөҫлөк тип алдап яҙыу мөмкинлеге бар. Беҙ, ғөмүмән, үҙ эшебеҙҙә концептуаль йүнәлеш алырға тейешбеҙ.

Тел мәсьәләһе. Элегерәк беҙҙең етәкселәр көнбайыш башҡорттарының телен татар теле тип атай ине. Хәҙер беҙ бындай хата ҡараштан ҡотолоп киләбеҙ. Яңыраҡ ҡаңныларҙың икенсе йыйыны булып үтте, мин ундағы сығышымда: "Беҙгә һөйләш телдәребеҙ ҡәҙерле, әммә әҙәби телебеҙҙе лә ҡәҙерләй белеп өйрәнергә кәрәк",- тип әйттем. Ысынлап та, милләтебеҙ ниндәй генә диалектта һөйләшмәһен, милләтте бер бөтөн итеп уның әҙәби теле ойоштора. Мәҫәлән, Шәйехзада Бабич үҙе Әсән ауылында тыуып үҫкән, ә 1919 йылда "Башҡорт халҡына көйлө хитап"ты ул башҡорт милли әҙәби телендә яҙа. Бабич йәш кенә көйө лә милли әҙәби телдең әһәмиәтен аңлаған. Тимәк, улар Вәлидиҙәр менән бергә был мәсьәләлә ниндәйҙер ҡараш-фекер туплаған булған. Шағирҙың был әҫәрен улар Саранскиҙа листовка итеп сығарып таратҡан. Бабич шулай уҡ 1916 йылда уҡ "Көтәм" тигән шиғырын башҡортса яҙған. Шиғырын ул "Тормош" тигән гәзиткә алып килеп, ниндәй телдә яҙылһа, шул телдә баҫылып сығыуын һораған. Әммә һорауы ҡәнәғәтләнерлек булмағас, уны кире алған да: "Был шиғырҙы башҡортса баҫтырыр көндәр тыуыр әле", тип кеҫәһенә һалып, редакциянан сығып киткән.



***Әгәр ҙә башҡорт халҡы этногенезын бер нисә этапҡа бүлһәк, беҙҙең милләт составындағы ырыу-ҡәбиләләрҙең яртыһынан күберәген Алтын Урҙанан сығыусылар тәшкил итә. Улар бынан ни бары биш-алты быуат элек кенә башҡорт халҡына ҡушылған. Ә уға тиклем был ерҙәрҙә башҡорт милләтенең ядроһын тәшкил итеүсе ырыуҙар йәшәгән. Беҙ бында нимәгә иғтибар итәбеҙ? Донъяны тик баҫып, көс менән яулап алырға күнеккән Алтын Урҙа ырыуҙарының башҡорт милләтен ҡабул итеүендә ядроның ниндәй көскә эйә булыуы күренә. Әйтәйек, болғарҙар менән бындай хәл килеп сыҡмай, улар юҡҡа сыға. Шулай итеп, хәҙерге башҡорттар бәшәнәктәрҙең, кимактарҙың, Волга булғарҙарының, һуңғы һундарҙың, Енисей ҡырғыҙҙарының замандаштары.***

**▸ Евразияла йәшәүсе аҙ һанлы халыҡтарҙың киләсәгендә Ислам факторы көсәйеүе, әлбиттә, ҙур роль уйнаясаҡ. Был осраҡта беҙ үҙебеҙҙе төрки телле халыҡтарҙан айырыбыраҡ торған ҡиммәттәребеҙҙе нығытырға бурыслыбыҙҙыр. Әйтәйек, был ҡиммәттәргә ҡурайыбыҙҙы, оҙон көйөбөҙҙө, бейеүебеҙҙе, милли мәҙәниәтебеҙҙе индерә алабыҙ. Шулай түгелме?**

**С. Хәмиҙуллин:** Мин телетапшырыу әҙерләп, көнбайыш башҡорттары араһында йөрөгәндә халыҡтың ҡурайыбыҙға битараф булмауына иғтибар иттем. Һуңғы осорҙа киң үҫеш алған ҡурай сәнғәте, ҡурай моңо ул төбәк башҡорттарының ҡанында ятҡан милли рухты уятыуҙа ғәйәт ҙур роль уйнай. Күптәр ҡурайҙа уйнап өйрәнергә теләк белдерә. Ҡурайҙа уйнап өйрәнергә ынтылыу кешене үҙенән-үҙе тарихын өйрәнеүгә, милли асылын төшөнөүгә алып килә. Сөнки ысын мәғәнәһендә ҡурайҙа уйнап өйрәнер өсөн төүшарт - башҡорт рухлы булыу, ә быныӊ үҙ нәүбәтендәге төүшарты - үҙ милли асылыңды, тарихыңды белеү. Бына шундай мөғжизә ул ҡурай.

**Р. Шәкүр:** Килешәм, ҡурай ғына түгел, ғөмүмән, динебеҙ телебеҙ һәм еребеҙ, беҙҙең милли аңыбыҙҙы тотоп тороусы барлыҡ рухи ҡиммәттәребеҙҙе бергә туплап эш итеү фарыз.

**▸ Тағы ла бер ҡурҡыныс янай Рәсәйҙәге барлыҡ халыҡтарға: ул да булһа, беҙҙе донъяға доллар аша ҡарарға мәжбүр итеүсе "Америка индивидуализмы". Уның йоғонтоһон да ныҡ тоя башланыҡ, бигерәк тә ауылдарҙа хатта бер туғандарҙың бер-береһе менән аралашмауы, ҡунаҡҡа саҡырышмауы күҙгә салына. Нимә генә тимәйек, беҙҙең милләт туғанлыҡ менән көслө...**

**С. Хәмиҙуллин:** Бынан ҡотолоуҙың юлы - милли традицияларыбыҙҙы тергеҙеүҙә. Ырыуҙар хәрәкәтен маҡсатлы йүнәлештә үткәреү ҙә ыңғай һөҙөмтә бирәсәк. Тик үкенес: дәррәү төҫ алған "Шәжәрә байрамдары" һүрелеп ҡалды ниңәлер.

**Р. Шәкүр:** Һәр хәлдә, ырыу кимәлендәге көс - ул бер ниндәй ҙә закон, көс менән тыйып, идара итеп булмай торған, ҡан тартыуы кимәлендәге беҙҙең таяныс. Минеңсә, "Шәжәрә байрамы" унан элегерәк башланған ырыуҙар хәрәкәтенең дауамы булды. Ҡыҫҡаһы, беҙгә Хоҙай Тәғәлә тарафынан бирелгән ошо ерҙә милләт булып йәшәү хоҡуғын яҡларға һәм һаҡларға кәрәк. Был һәр башҡорттоң изге бурысы булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошондай уй-ниәттәр, ғәмдәр-сәмдәр менән йәшәй беҙҙең Салауат рухлы шәхестәребеҙ. Күңелдәрендә уның рухын, йөрәктәрендә милләтебеҙгә оло һөйөү йөрөтөүсе был арҙаҡлыларыбыҙ батырыбыҙ исемендәге дәүләт премияһына күптән лайыҡ.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Бөтә тәне ҡалтырана, йөҙөн тир ҡаплаған, ҡулы быялаға йыртылып ҡанаған, ара-тирә "Салауат, Салауат, ғәфү ит, бер нисек тә ярҙам итә алмайым, үҙем зинданда ултырам", - тип күҙ йәштәрен түгә-түгә шыбырҙауын ғына белде.***



Әмир ӘМИНЕВ

# ЙОНДОҘ СӘСКӘ

**Повесть**

Бер мәл бойороҡҡа оҡшаш ҡырҡа тауыштар яңғыраны. Халыҡ тулҡыны йәйланы, оҙаҡламай бөтөнләйгә туҡтаны. Арыған аттар, бышҡырып, баштарын эйҙе, һыбайлылар ергә төштө, барыһы ла арбалағы ситлек янына йыйылды. Арбаның алғы өлөшөндә барған берәү ситлектең ҡапҡасын асып эскә керҙе. Тотҡондоң аяғындағы бығауын систе һәм тегене этеләп-төрткөләп ергә төшөрҙө. Оҙон кәүҙәле берәү, командирҙарылыр, күрәһең, нимәлер әйтте, эргәһендәгеләр меҫкендең өҫтөндәге һәләмә кейемен систереп, оҙонса бүкәнгәме һуҙып һалдылар. Ҡоралды һалдаттар уны уратып баҫты. Шунда Рәүеф тотҡон тирәләй һалдаттар ғына түгел, саҡ ҡына ситтәрәк әллә күпме ябай кешенең дә баҫып торғанын шәйләне. Улар, баштарын эйеп, тотҡонға баҡҡан. Ҡараштары нәфрәтле, йоҙроҡтар төйнәүле. Тирә-яҡ ауылдарҙан ҡыуып килтерелгән халыҡтыр, ахыры. Тағы баш күтәрһәгеҙ, һеҙҙең менән дә шулай буласаҡ, тип, ғибрәт өсөн ҡаратып торалар, күрәһең. Бер нәмә лә ҡыла алмайҙар шул, бахырҙар. Ҡорал юҡ ҡулдарында... Һәм Рәүеф бында алып килгән саҡтарында ҡыйыу егеттең йәшел яланда ҡасырға маташыуын, "ҡара ҡарға"ларҙың уны ҡыуып етеп, ҡулдарына бығау һалып машинаға килтереп ырғытыуҙарын шулай күмәкләп ҡарап торғандарын хәтерләне...

"Салаватке - 150 кнутов, Юлаю - 100", тип сәрелдәне оҙон... Бәй, Салауат батыр менән атаһы Юлайҙы һуҡтыралар түгелме һуң? Ҡәбәхәттәр, йыртҡыстар! Рәүеф шырпы һымаҡ ҡапыл янып-ярһып китте лә, үҙ-үҙен белештермәй, тәҙрәгә һуҡты: "Туҡтағыҙ, һеҙ нишләйһегеҙ, сволочтар! Ул бит Салауат!" Йән асыуына һөрәнләне, иланы, үкһене, тотҡондарҙың арҡаһына шыйылдап ҡамсы төшкән һайын үҙенә һуҡҡан һымаҡ үрһәләнде, тәҙрә тупһаһына менде, рамға йәбеште, быялаһын селпәрәмә һуғып төшөрҙө лә тимер рәшәткәне һелкетергә тотондо. Унан икенсе, өсөнсө тәҙрәгә ҡапланды, ситлеккә бикләнгән йыртҡыс ише, өй буйлап сапты, ишекте типте, унан, үҙенең һүҙҙәренә үҙе тонсоғоп, шартлар сиккә етеп иҙәнгә ҡоланы...

Тауышҡа ҡурҡып уянған Рәүфәнең "Ни булды?" тип үрһәләнеүен дә, тынысландырырға тырышып, башын күкрәгенә ҡыҫыуын да, ашығып килеп кергән һаҡсының эргәһенә килеп баҫыуын да шәйләмәне. Бөтә тәне ҡалтырана, йөҙөн тир ҡаплаған, ҡулы быялаға йыртылып ҡанаған, ара-тирә "Салауат, Салауат, ғәфү ит, бер нисек тә ярҙам итә алмайым, үҙем зинданда ултырам", - тип күҙ йәштәрен түгә-түгә шыбырҙауын ғына белде. Уның тартышҡан, дерелдәгән, пружина ише бер көсөргәнгән, бер бушаған кәүҙәһен ҡосҡан Рәүфә уны "һаташа" тип, ә һаҡсы "ултыра торғас был бәндә, ниһайәт, аҡылынан яҙҙы" тип уйлай ине...

* * *

- Рәүеф ағай, концерт бара бит, ниңә ҡарамайһың? - тине Рәүфә бер кисте. Тауышы күңелсәк яңғыраны - кинәнеп тыңлайҙыр, ахыры. Рәүеф боролдо: экранды тултырып ул сәхнәлә тотошон да, тауышын да үҙ итмәгән, әммә телевизорҙан "төшмәгән" халыҡ артисы йырлап маташа ине. Тауышы бар, ә көйө-моңо юҡ.

- Ҡарайымсы, - тигән булды Рәүеф, ҡатынды рәнйетмәҫ өсөн генә.

- Ҡарамайһың шул. Концерт башланһа, телевизор алдынан китәһең дә бараһың.

- Әллә, йыры ла оҡшамай, телевидениеның ошоноң ише концерттарҙы үтә йыш биреүҙәрен дә өнәмәйем. Әйтерһең дә, тормошобоҙҙа бөтәһе лә ал да гөл, беҙҙең бер ниндәй проблемалар, етешһеҙлектәр юҡ, аяҡ һәлберәтеп шоу ҡарарға ғына ҡалды.

- Аңламаным. Концертһыҙ нисек була инде ул?

- Концерты ла кәрәк, ләкин үтә йыш түгел, аҡыллы, проблемалы тапшырыуҙар иҫәбенә булмаһын. Юҡһа, күр, кис һайын концерт, шау-шыу, уйын-көлкө, йыр ҙа бейеү. Халыҡты тамам йоҡлаталар бит, алдайҙар, киҫкен сәйәси, социаль, ижтимағи темаларҙан ситкә алып китәләр. Был беҙҙә генә түгел, Үҙәк телевидениеһы ла шулай. Ҡайһы каналды асма - Америка боевиктары, атыш, үлтереш, көсләү.

- Ҡуй, Рәүеф ағай, концертһыҙ булмай барыбер ҙә. Сәйәсәте лә, башҡаһы ла кәрәкмәй, миңә - концертты ғына бир.

- Шулай икәнен күптән аңланым инде. Концерт башландымы, йәшник эсенә инерҙәй булып ултыраһың. Юҡ, шәхсән һине ғәйепләүҙән әйтмәйем, беҙҙең барыбыҙҙы ла шуға күнектерәләр.

- Һин уҫал барыбер ҙә, Рәүеф ағай, оҡшамай, тиһең дә...

- Илдә ябай кешенең эшен, эш хаҡын, көнкүрешен яҡшыртыу өсөн бик аҙ эшләнә, түрәләр үҙҙәрен генә ҡарай, урлаша, алдаша. - Шулай тине лә телен тешләне - артығын һөйләне. Тәҙрә янына килеп, тышҡа баҡты. Күпмелер ваҡытҡа юғалып торған ҙур ҡара себен ҡолағы төбөнән шыжлап осто ла шап итеп быялаға килеп ҡаҡлыҡты. Ныҡ бәрелеүҙән шаңҡып, тәҙрә тупһаһына килеп төштө. Бер нисә минут яҡтас, әйләнде һәм рам буйлап өҫкә үрмәләй башланы. Рәүфә өндәшмәне, кинәнеп, йотлоғоп концерт ҡарауын белде.

Көн артынан көн үтте, улар аҙнаға, айға йыйылды. Буранлап ҡар яуҙы, унан иреп бөттө, унан йәнә яуҙы. Еллəп алды, сыуаҡ көндәр торҙо. Сыуаҡ көндәрҙе суйындай ауыр болотло күңелһеҙ тәүлектәр алыштырҙы. Һауа торошона ҡарап, тотҡондарҙың кәйефтәре үҙгәрҙе. Әрләшеп тә киттеләр, яраштылар ҙа, донъяларын онотоп яратыштылар ҙа. Рәүфә илап та алғылай. Һауа торошона ҡарап, торлаҡтары бер һыуынды, бер йылынды. Йөрөргә сығарған саҡта, утын тиһәң хәтере ҡалыр, сереп ауған йәки ҡороған алмағастарҙы, кипкән ҡарағат, ҡурай еләге, крыжовник ботаҡтарын өйгәйнеләр бер нисә урынға, хәҙер шуларҙы индереп яғалар мейескә. Йылыһы сыҡмай тиерлек; арҡа, ҡул йылытырлыҡ ҡына, өҫтәмә рәүештә юрған-маҙар индер, тигәйне лә Рәүеф, "ҡара ҡарға" ҡолағына ла элмәне. Һорай торғас, бер йөк машина утын ғәләмәте килтереп ауҙарҙылар ауҙарыуын, тик ағас сей, уны көн дә тигәндәй үҙҙәренә бысып, ярып индерергә тура килә. Индергәс, мейес башына һалалар киптерергә. Ҙур өйҙө йылытыр өсөн ҡаты һәм ҡоро утын кәрәк, тик уныһын ҡайҙан алаһың? Былай ҙа, һаҡсы күрмәгәндә - күрһә лә күрмәмешкә һалыша - ихатаны уратып тотолған штакетникты кәртәһенән һурғылап индерәләр. Штакетнигы ҡайындан, йылыһы бар. Мейескә тәүҙә шуны һалалар бер-ике бөртөк, өҫтөнә - сей утынды. Быҫҡылдап-быҫҡылдап ята инде шунда, әҙ-мәҙ йылыһын сығарып.

Аҙна-ун көнгә бер мунсаға йөрөтәләр. Уныһы күҙәтеү вышкаһының артында, ваҡ ҡайынлыҡ араһында. Тәүҙә - Рәүефте, ике сәғәттән һуң - Рәүфәне. Ҡара мунса бәләкәй, таҡта солан менән, әммә һәр саҡ һыуы күп була, эҫе итеп яғалар. Кем яға, кем ҡарай - уныһын Рәүеф белмәй. Кергәндә лә, сыҡҡанда ла берәйһен күрермен-осратырмын тимә. Мөғжизә инде торғаны бер. Кейем, түшәктәрен дә һаҡсы алыштырып сыға билдәле-тәғәйен көндәрҙә, нишләп башҡа кеше, әйтәйек, берәй ҡатын-ҡыҙ шөғөлләнмәй был эштәр менән - шулай уҡ сер.

* * *

Гәзит-маҙар, таба алһаң, китаптар ҙа индер әле, уҡып ятайыҡ, ваҡыт үткәреп булмай ҙаһа, тип әйтеп ҡарағайны ла Рәүеф, тыңламаны һаҡсы. Нишләһен, ара-тирә радионы аса, һирәкләп телевизорға күҙ һала. Ләкин оҙаҡ ҡарай, тыңлай алмай, тиҙ ялҡа, сөнки хәбәр, мәғлүмәттәре мөһим түгел, бер үк һәм гел "ура", оптимистик рухта. Баҡһаң, тормоштары, телевизорҙан күрһәткәнсә, ал да гөл, бөтә нәмә хәл ителгән, мейес башына менеп аяҡ һелкеп ултыраһы ғына ҡалған...

Уҡыу йылы башланды, директорҙы, Ғәлимде, уны алып китһәләр ҙә, дәрестәр төҙөлгән расписание буйынса үтәлер. Улар юҡ тип кенә балаларҙы уҡыуҙан туҡтатмаҫтар. Ҡыҙыҡ, ауыл халҡы улар тураһында нимә һөйләй, улар юҡлығын уҡытыусылар балаларға нисек аңлата икән? Моғайын да, район мәғариф бүлегенә лә, администрацияға ла еткергәндәрҙер. Аптырашып ултыралармы, әллә юғарыраҡ инстанцияларға хәбәр итеп, эҙләү ойоштороларлармы? Бәләһенән баш аяҡ, тип, бер ҡайҙа йөрөмәүҙәре лә ихтимал. Беҙҙең халыҡ барыбер бербереһенең яҙмышына битараф ҡарай бит...

* * *

...Кеше һөйәге сыҡҡан көндән һуң байтаҡ ваҡыт үткәс кенә төштө Рәүеф яңынан баҙға. Унда ла ҡурҡа-ҡурҡа ғына. Шәмен соҡорға мөмкин тиклем яҡыныраҡ килтереп ултыртты ла, тубыҡланып, шомло ҡараңғылыҡҡа текәлде. Күрәге соҡор төбөнә ташланған көйө ята, башҡа һөйәк күренмәй. Төштө лә бер килке һағайып торҙо. Соҡор өҫтө бушлығында яртылаш аҫылынып торған бетон нигеҙҙәге элекке ярыҡтар тағы оҙонайған, яңылары барлыҡҡа килгән һымаҡ. Рәүеф эйелеп күрәгән алды, йәнә стенаның төрлө өлөштәренә ҡарап торҙо, унан еңелсә генә тупраҡҡа төрттө. Күрәк осо бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ еңел инеп китте. Был тынысландырҙы Рәүефте. Тимәк, һөйәк берәү генә булған һәм бында осраҡлы ғына килеп эләккән.

Ял иткәс ни, ул көн ифрат һөҙөмтәле эшләне Рәүеф: нигеҙҙең бер өлөшө, ике текә тау араһына һалынған күпер һымаҡ, соҡор тәңгәлендә аҫылынып ҡалды. Кисен, өҫкә сыҡҡанда, бетондағы ярыҡтар йәнә оҙонайған һәм киңәйгән, яңылары барлыҡҡа килгән кеүек тойолдо уға. Кем белә, бәлки, арығанға, көнө буйы тигәндәй ярым ҡараңғыла эшләгәнгә шулай күренгәндер? Бетонға ултырған иң аҫҡы имәндә ярыҡтар, ваҡ ҡына аҡ бәшмәк ҡаплаған еүеш урындар бар икән. Тәүге төшкәндә Рәүеф уларҙы күрмәгәйне...

- Мин ауырға ҡалдым шикелле, - тине бер кис Рәүфә. - Күңелем болғана, баш әйләнә.

Рәүеф терт итеп ҡалды. Әлбиттә, зина ҡылыуҙарының шуның менән тамамланырын самалай ине, ләкин былай тиҙ булыр тип һис көтмәгәйне. Ире менән өс йыл йәшәп ауырға ҡалмағанды, бынан һуң да ҡалмаҫ, тигәнерәк уйҙа ине. Баҡһаң, улай түгел, булмышы өйҙәге хәләленекен түгел, ситят Рәүефтең орлоҡтарын көткән булып сыға.

- Нисек... шикелле? Ҡалғанынды-ҡалмағанынды теүәл генә белмәйһеңме ни?

- Ҡайҙан беләйем? Быға тиклем ҡалып ҡарағанмы ни?

Шулай тиһә лә, тауышы һис ҡайғылы түгел, киреһенсә, шатлыҡлы ине Рәүфәнең. Сөнки өс йыл тулһеҙ йөрөгәндән һуң көтмәгәндә-уйламағанда балаға уҙыуы уның өсөн ҡыуаныс, хатта бәхет, күрәһең. Һуңғы көндәрҙә нисектер күңелләнеп, һүҙе күбәйеп, шаянланып, йөрөшө талғынланып киткәйне шул. Бына нимәгә булған икән ул үҙгәрештәр.

- Да-а-а! Шуны теләгәйнең бит, ҡабул булды, тимәк?

- Ниндәй ҡатындың әсә булғыһы килмәһен, Рәүеф ағай? Ә һин үҙең шат түгелме әллә?

- Шат, һинең өсөн шат. Тик нисек аңлатырһың икән һуң был хәлеңде иреңә?

- Ул турала мин бөтөнләй уйламайым әле, ҡасан сығарыуҙары хаҡында ғына уйлайым. Ултырыу оҙаҡҡа һуҙылһа, нишләргә? Балаға тегеһе кәрәк буласаҡ, быныһы...

- Бәй, ауырлы ҡатынды нисек тотһондар? Әйтербеҙ. Врач килеп тикшерер ҙә сығарырға ҡушыр. Хаҡтары юҡ артабан да һине бында тоторға.

Бер яҡтан, әлбиттә, шатлыҡ - һинең балаң, икенсе яҡтан насар - сит ҡатындан. Хәйер, Рәүфә Рәүефкә һис сит ҡатын түгел хәҙер. Үҙ итә, ярата уны. Бергә ултырғандан ғына яралмаған ул тойғо, енси яҡынлыҡтан да тыумаған, кеше булараҡ та оҡшай уға Рәүфә, хужабикә булараҡ та. Уның менән нисектер еңел, яҙмыштарына яҙған фажиғә лә ҡасан да булһа үтә торған ваҡиға итеп ҡабул ителә. Ул булмаһа, Рәүеф, моғайын, аҡылдан яҙыр йә үҙ-үҙенә ҡул һалыр ине. Әлбиттә, хаҡ ҡайғыра Рәүфә: артабанғы тормош-көнкүрештәре ниндәйерәк юҫыҡ алыр. Сөнки, һаман да тотһалар, проблемалар тыуа башлаясаҡ бит. Иртәме-һуңмы сығарырҙар, балаһын өйөндә табыр, иренә уныҡы икәнен иҫбатлай ҙа алыр. Ә Рәүеф үҙе Сәғиҙәһе алдына ниндәй йөҙ менән ҡайтыр һуң? Йәшерен мөхәббәт емеше тураһында ғүмер буйы өндәшмәй йөрөй алырмы? Өндәшһә, оло ғауға ҡубасаҡ. Ғауғала ғына туҡтаһа. Айырылышыуға ла барып етеүе ихтимал. Ул сағында үҙенең малайы менән ҡыҙын әлеге балаға алыштыра булып сыға. Ҡапыл үҙен ҡулға алырға килгән төндә "ҡара ҡарға"ның бәләкәй карауатта йоҡлаған ҡыҙына оҙаҡ итеп текәлеп тороуы иҫенә төштө. Ниңә шулай оҙаҡ ҡараны һуң ул? Бала ятҡанға түгел бит инде. Берәй уйы, ниәте, моғайын да, булғандыр. Йөрәкһеҙ, бөтөнләй эмоцияһыҙ, робот рәүешендәге ул кешенең ниндәйҙер хис-тойғоға бирелеүе ғәжәп...

Бер көндө, оҙаҡ ҡына яуған ямғырҙарҙан һуң, урман ауыҙына еңел машина килеп туҡтаны. Эсенән тәүҙә 7-8 йәштәрҙәге малай һикереп төштө, артынса ҡабаланмай ғына йәш сибәр ҡатын менән йыуантыҡ ир сыҡты. Фырт кейенгәндәр, өсөһөнөң дә аяҡтарында - резина итектәр, өҫтәрендә - кәпәс, курткалар, ҡатындың ҡулында - кәрзин. Тимәк, бәшмәк йыйып йөрөүҙәре. Малайға ни мәҙәк кәрәк, алан-йолан ҡаранды ла, шөкәтһеҙ өйҙө шәйләп, шунда йүгерҙе. Рәүфәнең шкафтан тапҡан сепрәк-сапраҡтан үҙенә нимәлер тегеп, Рәүефтең нигеҙҙе ҡаҙып сығып, тәҙрә төбөндә берсә тышты күҙәтеп, берсә һаман да теге ҙур ҡара себендең

***✓ Власть ятратмай был көтөүҙе, унан ерәнә, сирҡана, уның проблемаларынан алыҫыраҡ йөрөргә тырыша. Ул үҙҙәренә кәрәкле сәйәсәттәрен үткәргәндә генә хәжәт. Халыҡ хәл итте, тип әйтер өсөн.***

тәҙрә быялаһы өҫтөнән ярыҡ эҙләүен ҡарап ултырған сағы ине.

Малай, йыуғыс ише ятҡан үләнгә эләгә-йығыла, өй янына йүгереп килде лә тәҙрәнән эскә ҡарарға маташты, әммә, нигеҙ бейек булғанлыҡтан, ҡарай алманы, шунан ҡашағаға йәбешеп нигеҙгә менде һәм өлгөгә ҡапланды. Рәүеф уға ҡулдары менән ишаралап, ишеккә бар, атайыңа әйт, тигәнде аңлатырға тырышты. Тик, ғәжәп, малай уның хәрәкәттәрен дә, уның үҙен дә күрмәне шикелле - бер ниндәй реакцияһы булманы. Башын тегеләй-былай борғолап, бер усын маңлайына ҡуйған килеш өй эсен байҡауын белде. Шунан икенсе тәҙрәгә, унан өсөнсөһөнә күсеп ҡапланды. Рәүеф уның артынан йөрөп алдында ым-ишара яһауға, өндәшеүгә, хатта ҡысҡырыуға ҡарамаҫтан, малай бөтөнләй ҙә иғтибарһыҙ ҡалды. Дүртенсе тәҙрәнән һикереп төшкәндә, ахыры, яңылыш баҫып аяғын ауырттырҙы - аҡһай-туҡһай машиналары яғына һыпыртты. Атаһы янына барып, ҡулдары менән йортҡа ишаралап нимәлер ләпелдәне. Әммә атаһы малайының хәбәренә лә, яңғыҙ йортҡа ла битараф ҡалды, етмәһә, иламһыраған улы арыраҡ йөрөгән әсәһе янына киткәс, курткаһының түш кеҫәһенән ялпаҡ ялтыр һауыт сығарып, бер нисә йотом нимәлер эсте. Бер аҙҙан улы менән ҡатыны уның янына килде, нимәлер һөйләшеп алдылар ҙа машиналарына ултырып китеп барҙылар. Был тирәлә бәшмәк таба алманылар, күрәһең. Машина күҙҙән юғалғас, түтәлдәге йондоҙ сәскәгә күҙ һалһа, уны малайҙың ергә һеңдерә яҙғанһы тапап киткәнен күрҙе Рәүеф. Уның йөрәге әрнене - сәскә күтәрелә алмаһа, уның бынан сығыу өмөтө тамам һүнәсәк...

"Донъяла нимә бара ул, ниндәй ғәйебем бар икән һуң?" тигән уй Рәүефте бер минутҡа ла ташламаны. Ятһа ла, торһа ла. Бындай эш осраҡлы башҡарылмай, икенсе кеше менән бутауҙары мөмкин түгел, йә уны күрә алмаған берәй ауылдашы ошаҡлаған, йә үҙе түрә-ҡараға ҡаршы һүҙ әйткән. Икенең бере. Кем ошаҡлауы ихтимал да кемгә ниндәй ауыр һүҙ әйтеүе бар һуң, улайһа? Директор менән дә, уҡытыусылар менән дә аралары арыу булды, ауылдаштарының, күрше-күләндең үс тотҡаны тойолманы, сәйәси темаларға лаҡап йә анекдот һөйләп йөрөгәне юҡ. Һөйләһә лә - гәзиттә уҡығанды, телевизорҙан ҡарағанды ғына. Уны кем һөйләмәй, хәҙер бөтәһе лә сәйәсмән, фекер алышыу юҫығындараҡ бара, ғәҙәттә, ундай гәпләшеүҙәр. Хәйер, теләһәң йәки ҡушһалар, йомортҡанан да йөй табып була инде...

Туҡта, Дәүләт Думаһына һайлауҙар алдынан район мәғариф бүлеге мөдире Хәбибуллин мәктәптәренә килеп осрашыу үткәргәйне бит. Шунда тыуған бәхәстә ҡатнашыуы сәбәп булманымы икән ҡулға алыуҙарына? "Күрһәтермен әле мин һиңә", - тип янап киткәйне ләһә. Моғайын, шуның ғына "күрһәтеүе"...

"Берҙәм ил" фирҡәһен Дәүләт Думаһына үткәреү буйынса эш ҡыҙа барған саҡта килгәйне мөдир уларҙың мәктәбенә. Тәүҙә район мәғариф бүлегенең эше, ниндәйҙер ҙур ҡаҙаныштары хаҡында оҙаҡ итеп һөйләне, башҡарылып бөтмәгән, әммә тиҙ арала мотлаҡ эшләнәсәк эштәр хаҡында шыма ғына әйтеп үтте, уларҙың мәктәбенә лә туҡталды. Маҡтаны, оло бурыстар ҡуйҙы, унан төп темаға - һайлауҙарға күсте. Ялҡтырғыс оҙон хәбәренең төп мәғәнәһе шул ине: тағы ла ҙур уңыштарға өлгәшеү өсөн һеҙгә, уҡытыусыларға, мотлаҡ "Берҙәм ил" фирҡәһе кандидаттарына тауыш биреү фарыз. Йәмғиәт үҫешендәге артабанғы еңеүле аҙымдарҙы тик улар ғына башҡарып сыға аласаҡ, йәнәһе.

Сағыштырмаса йәш булһа ла - педагогия институтының физик культура факультетын бөтөп, район үҙәге мәктәбендә бер нисә йыл ғына эшләгән еренән тәүҙә директор, ике йылдан әлеге вазифаһына ултыртҡайны дуҫ-ише, ағай-энеһе - элекке партком секретары һымаҡ оҙон-оҙаҡ һөйләне, аҙаҡтағы әлеге өндәү-өгөтө лә тупаҫ килеп сыҡты. Уҡытыусылар аудиторияһында бындай лозунг һымаҡ асыҡтан-асыҡ мөрәжәғәт, етмәһә, үҙен дә һөйһөнөп етмәгәс, сәйер, хатта тыңлаусыларҙы әҙәмгә һанамағансараҡ яңғыраны. Осһоҙло кәнфитте йылтыр ҡағыҙға төрөп бирә белмәне. Әҙәмгә һанамау уҡытыусыларҙың намыҫына тейҙе. Физкультура уҡытыусыһы Ғәлим, район буйынса ярыштарҙа мөдирҙең, физкультурник сағында, төп дәғүәсеһе булған һәм йыш ҡына, уҡыусылары тегенекенән яҡшы һөҙөмтә күрһәтеп тә, еңелгән, мөдир, судьялар менән әшнәлегенән файҙаланып, "еңгән". Шуға үс алырға теләптер, ахыры, бәхәсте Ғәлим башлап ебәрҙе.

- Хәбибуллин, һеҙ беҙгә ҡасан кәрәк булабыҙ, шул саҡта ғына киләһегеҙ. Килгән һайын тауҙай вәғәҙәләр бирәһегеҙ, ләкин береһен дә үтәмәйһегеҙ. Был юлы ла шулай буласаҡ. Мәктәптең утыҙ биш уҡытыусыһы һеҙҙеңсә тауыш бирәсәк, һәм һеҙ, еңеүҙе тәьмин иткән триумфатор булып, район администрацияһы тарафынан маҡталасаҡһығыҙ. Ә мәктәпкә бынан бер ниндәй ҙә файҙа булмаясаҡ. Күрше ауыл балаларын, исмаһам, ҡыш көндәре автобус менән йөрөтөргә кәрәк, тип нисә йыл әйтәбеҙ, һеҙ килгән һайын, ярар, ойоштороrбоҙ, тиһегеҙ ҙә ауылдан сығыу менән онотаһығыҙ. Формалар, саңғы, спортзалға матылар, башҡа кәрәк-яраҡ һорайбыҙ. Улар һаман юҡ, сөнки районға бүленеп килгәне һеҙҙең элекке мәктәбегеҙҙән уҙмай. Иң мөһиме - мәктәпкә капиталь ремонт кәрәк, уныһын да әйтә киләбеҙ.

- Директор йөрөһөн, йөрөмәй бит, - тип яуапланы Хәбибуллин, иҫе лә китмәй.

- Как йөрөмәй? - Директор урынынан һикереп үк торҙо. - Кергән һайын "надоел" тип ҡыуып сығараһығыҙ. Заявкалар күптән һеҙҙә ята!

- Һайлауҙарҙан һуң хәл итербеҙ барыһын да. "Берҙәм ил" фирҡәһенә тауыш бирегеҙ ҙә...

- Тағы "итербеҙ". Тәүҙә - һеҙҙең эш, шунан ғына балаларҙыҡы. - Быныһы йәнә Ғәлим. - Әлбиттә, теләгәндә автобус та алып була, директор Өфөгә барып, мәғариф министрлығына керә ала, ныҡлап йөрөһә, капиталь ремонтҡа аҡсаһын да юлларға, спорт инвентарын, башҡаһын хәстәрләргә лә мөмкин. Әммә иң насары - һеҙҙең беҙҙе эш үгеҙе тип һанауығыҙҙа. Власть яратмай был көтөүҙе, унан ерәнә, сирҡана, уның проблемаларынан алыҫыраҡ йөрөргә тырыша. Ул үҙҙәренә кәрәкле сәйәсәттәрен үткәргәндә генә хәжәт. Халыҡ хәл итте, тип әйтер өсөн.

**(Дауамы бар).**

*МАТУР ХӘТИРӘЛӘР*

**Бер-ике йыл элек "Матур хәтирәләр" тигән рубрика тәҡдим иткәйнем "Киске Өфө" гәзитенә. Ул рубрика бик һирәк кенә килеп сыға. Күрәһең, гәзитебеҙҙе уҡыусылар үҙ хәтирәләре менән уртаҡлашырға ваҡыт тапмай. Бына әле яңы уҡыу йылы башланыр алдынан ошо рубриканы яңыртып, мәктәп йылдарындағы ҡыҙыҡ хәлдәр тураһында ла яҙып ебәрергә булдым әле. Гәзит уҡыусылар араһында, моғайын, мәктәп йылдарындағы, йәшлек ваҡытындағы ҡыҙыҡ һәм матур хәтирәләр һаҡлаусылар барҙыр, бәлки, улар ҙа миңә ҡушылыр, тип өмөт итәм.**

# МӘКТӘП ЙЫЛДАРЫНДА...

## мәҙәк хәлдәр күп була



• Инде стажлы пенсионер булһам да, мәктәптә уҡыған йылдарҙағы ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы йыш иҫкә төшөрәм. Бына шуларҙың береһе тураһында һөйләйем әле. Пединститут студенттары беҙҙең мәктәптә практика үтә ине. Бына бер көндө бер егет дәрес бирә. Ул класыбыҙға инеп, матур итеп яңы тема аңлатты һәм уҡыусыларҙың уның һөйләгәндәрен үҙләштерҙеме-юҡмы икәнен белер өсөн өҫтәмә һорау бирҙе. Берәү ҙә ҡул күтәрмәгәс, ҡарашын журналға төбәне. Әлбиттә, ундай саҡта бүлмәлә тынлыҡ урынлаша. Студент алфавит буйынса теҙелгән фамилиялар буйлап бармағын йүгертте лә, Йәнбулатов яуап бирә, тип, тынып ҡалған уҡыусыларға төбәлде. Йәнбулатов Әхмәт аяғүрә тороп баҫты ла, түбә таҡтаһына ҡарап, һорауға яуап эҙләй башланы. Беҙ ҡымшанмай ғына, тын ҡалып ултырыуҙы дауам итәбеҙ. Шул саҡ таҡта тапҡырындағы иҙән ярығынан кескәй генә сысҡан балаһы килеп сыҡты. Ул, ниңә былар тып-тын ултыралар икән, тип аптыраны шикелле, беренсе рәттә ултырған уҡыусының янына уҡ килеп, уның аяҡ аҫтында урала башланы. Беҙ барыбыҙ ҙа "кескәй ҡунаҡты" ҡыҙығып күҙәтәбеҙ. Сысҡан тураһында практикант менән Әхмәт кенә белмәй. Ә ахмаҡ сысҡан балаһы бүлмә буйлап йүгереп йөрөй рәхәтләнеп. Бер мәл студент ағайыбыҙ бөтә уҡыусыларҙың күҙ ҡарашы иҙәнгә төбәлгәненә иғтибар итте һәм кескәй генә һоро туптай тәгәрәп йөрөгән сысҡан балаһын күреп ҡалды. Шунан ул шым ғына, һаҡ ҡына сысҡан янына яҡынлап, аяғын һелкетеп, "кескәй ҡунаҡты" ҡыуып маташты. Ә сыҡан уның менән уйнаусы табылыуына бик шатланды шикелле, ағайыбыҙҙың аяғы тирәләй сабып-йүгергеләй башланы. Шул саҡ Йәнбулатов та сысҡанды күреп ҡалды һәм бармағы менән төртөп күрһәтеп, бүлмәне яңғыратып: "Сысҡан, кескәй генә сысҡан балаһы!" - тип ҡысҡырып ебәрҙе. Гөр килешеп көлөштөк. Дәрес тамамланыуын белдереп, ҡыңғырау тауышы яңғыраны. Студент ағайыбыҙ көрһөнөп: "Дәрес тамам..." - тигән булды. Ә сысҡан ҡыңғырау тауышынан ҡурҡып, өңөн таба алмай буталанды. Әхмәт йүгереп барып ахмаҡ сысҡанды эләктереп алды ла: "Рәхмәт һиңә, минең ҡотҡарыусым!" - тип, уны өңөнә индереп ебәрҙе...

• Мәктәп йылдарындағы ҡыҙыҡтар бик күп инде ул. Бына тағы береһе тураһында. Бала саҡта минең бер ғәҙәтем бар ине. Дәрес тыңлағанда, аяҡ кейемдәремде сисеп, иркенләп ултырырға ярата инем. Минең был ғәҙәтемде класташтар ҙа белгән булған, күрәһең. Бер саҡ тарих дәресендә уҡытыусы ағай мине таҡта янына саҡырҙы. Тиҙ генә эйелеп, аяҡ кейемдәремде кейәйем, тиһәм, улар юҡ булған. Ҡыҙарынып тороп баҫтым да: "Ағай, таҡта янына сыға алмайым, туфлиҙарым юғалды", - тинем. Синыфташтарым гөр килешеп көлдө, ә кемдер "Уның аяҡ кейемдәре өйөнә ҡайтып киткән", тип өҫтәне. Әлдә уҡытыусыбыҙ һәйбәт ине: "Ярай, улайһа, урыныңда ултырып ҡына яуап бир", - тине. Шаян Ринат дәрестән һуң аяҡ кейемемде алып килде. Ҡәнәғәт, ауыҙы ҡолағынаса йырылған.

• Тағы бер хәтирә. Бишенсе синыфта беҙ география фәнен өйрәнә башланыҡ. Ул фәнде оло йәштәрҙәге уҡытыусы алып бара. Шуға ла мин уға ҡарата ниндәйҙер йәлләү хисе кисерә инем. Аҡрын ғына атлап йөрөй, тауышы ла тоноҡ ҡына сыға. Йәлләп, үҙемсә уға ярҙамлашҡан булам, гел генә уның ҙур картаһын, башҡа әсбаптарын география кабинетенә алып килешә торғайным. Бер дәрестә уҡытыусы: "Урта быуаттарҙа фән асыштары дин ҡалыптарына тап килмәһә, ғалимдарҙы язалағандар йәиһә төрмәгә япҡандар",- тип һөйләне. Уҡыусылар ул ғалимдарҙы йәлләп, бер-береһе менән фекер алыша башланы. Бүлмә гөж килеп тора. Уҡытыусы нисек тынлыҡ урынлаштырырға белмәй. Шул саҡ ул: "Галелео Галелей судтан һуң нимә тип әйткән?" - тигән һорау бирҙе. Беҙ бөтәбеҙ ҙә тынып ҡалдыҡ. Йәлләү хисенә бирелеп, уҡытыусының һуңғы һөйләмен тыңлап бөтөрмәгәнбеҙ икән. Тынлыҡты иң артҡы партала ултырырға яратыусы Факиһа Әлимбаева бүлде. Ул ҡулын күтәреп, тороп баҫты ла: "Галелео Галелей "А все таки Земля вертится!" тип әйткән",-тип, яуап бирҙе. Уҡытыусы киң йылмайып: "Әлимбаева, мин һиңә яуабың өсөн биш билдәһе ҡуям!" - тип, журналға эйелде. Шунан: "Эйе, кешелек таныймы, юҡмы, Ер шарыбыҙ үҙ күсәрендә әйләнә, был ысынбарлыҡ", - тип өҫтәне...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эйе, таныйбыҙмы, юҡмы, Ер шары үҙ күсәрендә әйләнә. Таныйбыҙмы, юҡмы, баш ҡалабыҙ Өфөнөң йәше 1500 йылдан ашыу икәнен ғалимдар күптән иҫбат итте. Таныйбыҙмы, юҡмы... Был исемлекте бик оҙаҡ дауам итергә булыр ине. Бөгөн кешеләр бер нәмәгә лә ышанмаусыға, битарафҡа әйләнде. Уларға ҡарайһың да, бына шул бөгөнгөнө элеккеләр менән сағыштырыуға, бала саҡ, йәшлек хәтирәләренә төшөп китәһең дә инде: беҙ гел яҡтыға, гел яҡшыға ышанып йәшәгәнбеҙ һәм шуның менән бәхетле булғанбыҙ икән. Шулай түгелме ни? Әйҙәгеҙ, ошо бәхетле мәлдәр, ҡыҙыҡлы хәтирәләр менән уртаҡлашайыҡ әле гәзитебеҙ биттәрендә.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨНЛӘШМӘ... иммунитетың ныҡ булыр

■ Сәләмәт булғығыҙ килһә, үҙегеҙҙе башҡалар менән сағыштырмағыҙ һәм көнләшмәгеҙ, тип белдерә Канаданың Конкордия университеты ғалимдары. Улар кешенең иммунитеты һәм гормональ фоны уның социаль торошо менән бәйле булыуын асыҡлаған. Эксперимент күрһәтеүенсә, үҙҙәрен уңышлы кешеләр менән сағыштырып, файҙаның уның иҫәбенә булмауына зарланырға яратыусыларҙың иммунитеты ла түбән булған, гормондар дисбалансы ла күҙәтелгән. Дуҫтары һәм хеҙмәттәштәре араһында үҙен кәрәкле кеше тип тойоусыларҙың кәйефе лә яҡшы була, улар төрлө вирусҡа ла бирешеп бармайҙар, имеш.

■ Коннектикута университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмға саҡ ҡына һыу етешмәй башлаһа, шунда уҡ кәйеф насарая, көсһеҙлек барлыҡҡа килә, фекерләү ҡеүәһе түбәнәйә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе профессор Лоренс Е. Армстронг фекеренсә, ял иткәндә лә, компьютер алдында ултырғанда ла һыу эсергә кәрәк. "Һыуһау тойғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыҡты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда һыуһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә кире эҙемтәләр башланған була", ти профессор. Бындай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк. Балалар өсөн был норманың дүрттән бер өлөшө йәки яртыһы ла етә. Был исемлеккә ҡайнар эсемлектәрҙе лә индерергә ярай, тик уларҙың составында кофеин булмаһын. Үлән сәйҙәре бигерәк файҙалы, бөтнөк, имбирь, аҡ сәскә сәйенә лимон да ҡушып ебәрегеҙ.

■ Йәйге эҫе көндә һау кеше лә тын ҡыҫылыуы, йөрәк тибеүе йышайыуы менән яфалана. Ә һау булмаған йөрәк был осорҙа бигерәк көсөргәнешле эшләргә мәжбүр була. Йәйге ялын баҡсала уҙғарыусыларға ауыр эштәрҙе көндөң эҫе мәленән алда йәки ул бер аҙ һүрелгәс башҡарыу кәңәш ителә. 30-40 минут эшләп алһағыҙ, туҡтап ял итегеҙ. Әгәр ҙә тынығыҙ ҡыҫыла, башығыҙ әйләнә йәки үҙегеҙҙе хәлһеҙ тояһығыҙ икән, шунда уҡ эшләүҙән туҡтағыҙ. Башты аҫҡа эйеп йәки эйелеп еләк-емеш йыйырға ла тырышмағыҙ, был осраҡта ҡан әйләнеше боҙолоп, баш әйләнеүе, артериаль ҡан баҫымының ҡапыл күтәрелеүе, иҫте юғалтыу, инсульт кисереү мөмкинлеге бермә-бер арта. Бындай эштәрҙе бейек булмаған ултырғысҡа ултырып башҡарырға кәрәк.

■ Туңдырма - "бәхет гормоны" - серотонин эшләп сығарырға һәләтле, шуға ла табиптар уны кәйефте күтәреүсе сара булараҡ та ҡулланырға тәҡдим итә. Туңдырмала файҙалы элементтар һәм витаминдар, мәҫәлән, кальций, Л-триптофан, лактоза, минераль тоҙҙар һәм еңел үҙләштерелеүсе аҡһымдар күп. Бер илдә артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы бер нисә кешенең диетик менюһына туңдырма өҫтәйҙәр. Эксперимент аҙағында көн һайын туңдырма ҡулланыусыларҙың тиҙерәк ябығыуы асыҡлана. Бәҡтиһәң, һөт аҙыҡтарында һәм туңдырмала булған кальций организмдағы артыҡ майҙарҙың яныуына булышлыҡ итә икән.

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# ЗАМАНМЫ ҒӘЙЕПЛЕ, ӘЛЛӘ ҮҘЕБЕҘМЕ?



## ИМЕН БУЛМАҒАН ҒАИЛӘ

**Бер ҡулына пакет тотҡан, икенсеһе менән үҙенән бер башҡа бәләкәйерәк малайҙы етәкләп, ҡабаланмай ғына атлаған үҫмерҙе ҡыуып еттем. Ҡул йөгө ярайһы ғына ауыр күренгән был балаларға өндәшмәй үтеп китә алманым. Ғәҙәттә, йәй көнө ҡала балалары тышҡа тиклем урамда бик уҡ күренмәй. Ата-әсәһе эштә саҡта рәхәтләнеп йоҡо туйҙыралар. Ә был икәү ни эшләп иртәнге һалҡында башҡалар һымаҡ йоҡо һимертмәй?**

- Иртә менән ҡайҙа юл тоттоғоҙ, малайҙар? Төйөнсөгөгөҙ ҙә ауыр ғына күренә, ярҙам кәрәкмәйме? - тип өндәштем.

Төпһөҙ зәңгәр күк йөҙөн хәтерләткән дүрт күҙ бер юлы күтәрелеп ҡараны. Һорамаһаң да, уларҙың ағалы-ҡустылы икәнлеге көн кеүек асыҡ ине. Олоранына - 6, бәләкәсенә 3-4 йәштәр самаһы. Олоһоноң ҡарашы шунда уҡ үҙгәрҙе. Юҡ, ҡурҡыу, шикләнеү тойғоһо күрһәтмәне ул, киреһенсә, һинең ни эшең бар, ана бара юлың, тигәнде аңлата ине уның ҡарашы. Уның ҡарауы, кесеһе алсаҡ булып сыҡты. Һаҡау ғына һөйләшһә лә, бер-ике минутта ҡайҙа китеп барыуҙарын, ағаһының ҡулындағы пакетта нимәләр булыуын һөйләп тә бирҙе.

Һыу ғына түгел, көн дә йылынып өлгөрмәгән ошо иртәлә был малайҙар Ағиҙел буйына китеп бара ине. Йылға ярында ҡыҙынырға йөн одеял, ике шешә һыу, бер-нисә телем икмәк алғандар. Пакет ситендә таушалып, бөкләнеп бөткән тәмәке ҡабы ятҡанын күреп ҡалдым.

- Шырпы ла алдығыҙмы әллә? - тим, тәмәке тураһында нисек һүҙ башларға белмәй.

- Юҡ, беҙҙең зажигалка бар, - тине әлеге бәләкәйе тәтелдәп.

- Йәйге ҡыҙыуҙа усаҡ яғырға ярамай. Бәләкәй генә осҡон тотош урманды юҡ итергә мөмкин, - тим.

- Беҙ усаҡ яҡмайбыҙ, - был юлы олоһо ҡыҫылды.

- Тоҡандырғыс нимәгә һуң улайһа? Тәмәке тартмайһыңдыр бит?

- Беҙҙең ғаиләлә бөтәһе лә тарта. Әсәйем дә, апайым да, ағайым да. Атайым да тарта торғайны. Ҡустым да бысҡыта, - ул һәр һүҙенә баҫым яһап, шул тиклем ҡәтғи әйтә. - Беҙҙең һымаҡ "неблагополучный ғаилә"ләрҙең бөтәһендә лә шулай.

Мин бөтөнләй албырғап ҡалдым: беҙҙең һымаҡ имен булмаған ғаиләләрҙең бөтәһендә лә шулай, тиме? Был ни тигән һүҙ булды инде?

- Кем улай ти һуң һеҙгә? - тип һорайым.

- Үҙем беләм. Ә былай беренсе тапҡыр мәктәптә ишеттем, - тауышында уҫаллыҡ, хатта агрессивлыҡ, күрә алмауссанлыҡ нотаһы ярылып ята малайҙың.

Һөйләшеүҙе дауам иткем, һис юғында, тәмәкенең зыяны тураһында нимә булһа ла әйткем килеп, туҡтаным. Тик был икәү икеһе бер юлы һулға боролдо ла атлауҙарын үҙ юҫығында дауам итте. 15-20 минут һөйләшкән арала был малайҙар бер тапҡыр ҙа йылмайманы. Туңдырма алып ашарһығыҙ, тип һонған илле һумды ла, рәхмәт әйтеү, йылмайыу түгел, бер ниндәй реакцияһыҙ, ҡулдан тартып тигәндәй алдылар.

Имен булмаған ғаилә. Үҫмер был хаҡта белеп әйттеме, әллә мәктәптә, урамда йәки башҡа урында ишеткәнен генә ҡабатлаймы? Ғөмүмән, ниндәй һуң ул имен булмаған ғаилә? Беҙ, ғәҙәттә, өҫтә-башы йыуылмаған, тәртип яғынан аҡһаған баланы ғына имен булмаған ғаиләнән тип иҫәпләргә күнеккәнбеҙ. Иң беренсе, әлбиттә, балаға ҡарата һөйөү, хәстәрлек, иғтибар булмаған, уның хоҡуғы, законлы мәнфәғәттәре яҡланмаған ғаилә иңәлер был иҫәпкә. Асылда, имен булмаған ғаиләләрҙе бер нисә төргә бүлергә мөмкин. Уның йәшерен төрҙәре лә бар. Мәҫәлән, ситтән ҡарағанда ғаилә бынамын тигән, ә бала тәрбиәһе йәһәтенән етди хаталарға юл ҡуйыла - балаларға ҡарата ҡаты мөнәсәбәт, бәләкәй генә шуҡлығы өсөн дә яза биреү, уның теләген иҫәпкә алмау менән бер рәттән, артыҡ ҡурсалау, үҫмергә үҙ аллы бер нәмә лә эшләргә рөхсәт итмәү, самаһыҙ контроль, күҙәтеү. Былар ҙа баланың хоҡуғын боҙоуға инә. Ата-әсәһе бөтә нәмәне бәхәс аша, бер-береһен енешеп хәл иткән ғаиләне лә әлеге категорияға индерергә мөмкин, сөнки унда үҫкән бала һәр ваҡыт үҙен ғәйепле, бәхетһеҙ тояса́к. Яҡын кешеләренең аҙғын тормош менән йәшәүе лә үҫмерҙәрҙә көмһенеү тойғоһо, ата-әсәһенә ҡарата асыу, ҡуралмауссанлыҡ хисе уята. Тап ошондай ғаиләләрҙә үҫкән балалар урамға ынтыла, насар ғәҙәттәрҙе тиҙерәк үҙләштерә, енәйәт ҡыла йәки үҙе енәйәт ҡорбанына әйләнә. Иртә менән һыу инергә китеп барған әлеге ике малай ҙа, өйҙә бөтәһе лә яҡшы булһа, бәхетле ғаиләләрҙә үҫкән тиҫтерҙәре кеүек, кинәнеп йоҡо туйҙырыр ине. Өйҙә түҙеп торғоһоҙ булғанға йылға буйына ашығыуҙары көн кеүек асыҡ.

Имен булмаған ғаиләләрҙә үҫкән, ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға, һис шикһеҙ, йәмғиәт ярҙамы кәрәк. Тик нисек ярҙам итергә була һуң? Иң беренсе, минеңсә, бындай балалар, үрҙә атап кителгән малай кеүек, үҙен имен булмаған ғаилә ағзаһы тип белергә тейеш түгел. Был йәһәттән педагогтар бик һаҡ эш итергә бурыслы. Юғиһә, үҫмерҙәрҙә "Беҙгә тартырға ла, эсергә лә, енәйәт ҡылырға ла ярай" ҡалыбы барлыҡҡа килеүе бар. Күберәк әңгәмә ҡорорға, яҡшы йәшәгән тиҫтерҙәренә ҡунаҡҡа барыуҙы ойоштороға була. Кемдәрҙер имен булмаған ғаиләләрҙең һәр береһенә өлгөлө, абруйлы ғаиләне наставник итеп тәғәйенләргә кәрәк, тигән фекер ҙә әйтә. Нисек кенә булмаһын, был проблемаға битараф ҡалырға ярамай. Бөгөнгө бәхетһеҙ балаларҙың ата-әсәһен күҙ уңынан ысҡындырыу ҙа еткән. Исмаһам, балаларҙы уларҙың юлынан китмәһен.

## УРАМ ЙОҒОНТОҺОНАН ҺАҠЛАП

**Эш бүлмәмдә телефон шылтыраны: "Һаумыһығыҙ, һеҙҙе 12 йәшлек үҫмерҙең әсәһе борсой. Кемдән кәңәш, ярҙам һорарға белмәйенсә, һеҙгә мөрәжәғәт итәм..." -тине ҡатынҡыҙ тауышы һәм бер нисә һүҙ менән үҙенең хәлен, проблемаларын һөйләп бирҙе.**

Әсә күтәргән мәсьәлә һис тә ваҡтөйәк түгел, киреһенсә, күп атай-

әсәйҙәр өсөн бик актуаль проблема ине. Ул да булһа, баланың көнө-төнө компьютер алдында ултырыуы. Эйе, был техника барлыҡҡа килеүенә күп ваҡыт та үтмәне, әммә ул беҙҙең көндәлек тормошҡа шул тиклем тәрән үтеп инде, хатта бөгөнгө көнкүрешебеҙҙе унһыҙ күҙ алдына ла килтермәй башланыҡ. Ул бөгөн хат яҙышыуҙы, китапхананы, кинотеатрҙы, театрҙы, гәзит-журнал уҡыуҙы, хатта дуҫтарҙы алмаштырҙы ла ҡуйҙы.

Күптән түгел генә бер танышым да шул юҫыҡта ҙур борсолоуын белдергәйне: "Һигеҙенсе класты тамамлаған улымдың өләсәһенән дә, минән дә тартынмай, һуңғы ваҡытта гел һүгенеп һөйләшкәнен ишетеп, урам йоғонтоһолор был, тип, кредитҡа компьютер алып бирҙем. Хәҙер улым мәктәптән ҡайта ла, дәресен арлы-бирле әҙерләгәс, компьютер артына ултыра. Өләсәһенә лә, миңә лә уның өйҙә ултырыуы оҡшай - өҫтө-башы таҙа, ҡайҙа йөрөй икән хәсрәтләнәһе юҡ. Тик бер аҙҙан шуға иғтибар иттем: көләкәс йөҙлә, шаян, һәр нәмәнән ҡыҙыҡ табып, рәхәтләнеп көлгән малайыбыҙ шымға әйләнде лә ҡуйҙы. Эргә-тирәһендәгеләрҙең нәмә һөйләгәнен дә тыңламай, дөрөҫөрәге, ишетмәй, шаярмай, көлмәй, артыҡ етди булып күренә башланы. Көндәлегендә лә "койроҡло биштәре" күбәйҙе бының. Класс етәксеһе улымдың һуңғы ваҡыттағы үҙ-үҙен тотошо буйынса хәүеф барлығын белдереп, һүҙ ҡуҙғатмаһа, үсмерлек осорон ауыр кисерәләр, тип тик йөрөгән булыр инем...

Уҡытыусы менән һөйләшкәндән һуң Фәнүрҙең (исеме үҙгәртеп алынды) һуңғы осорҙағы тәртибен күҙ алдына килтерергә маташтым: ҡабат-ҡабат әйтмәйенсә, ашарға ла ултырмай, яратҡан телевидение тапшырыуҙарын да онотто. Төнө буйы ултырыуы етмәгән, иртүк уяна, тороу менән йыуынып та тормаҫтан, компьютер артына ултыра. Был заман техникаһында үҙем һай йөҙгәс, ҡустымды саҡырып, улымдың ниндәй уйындар уйнауын, чатта кемдәр менән аралашыуын, йышыраҡ ҡайһы сайтҡа инеүен ҡарап, сәсем үрә тора яҙҙы. Урам йоғонтоһонан һаҡлайым тип, күптән түгел генә һөйләшеп һүҙе бөтмәгән, аралашырға яратҡан, күҙҙәре осҡон сәсеп торған шуҡ, тиктормаҫ улымдан, шулай итеп, зомби яһаным", - тип хәсрәте менән уртаҡлашты.

Компьютерҙың һаулыҡҡа зыяны тураһында ишеткәне булған танышымдың, ә психикаға ла нык тәьҫир итәләр тип уйламаған. Һөҙөмтәлә, каникулдың тәүге айында уҡ боҙолоу һылтауы менән компьютерын ремонтҡа тапшырған, ә июлдә улын ҡаланан ситтәге лагерға биргән. Тәрбиәселәргә улы менән булған проблема тураһында һөйләгән, ундағы психологтың ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә тырышыуы бушҡа үтмәгән.

Ғөмүмән, өйөндә компьютеры булған атай-әсәйҙәрҙең күбеһе был проблема менән осраша. Уҡыу, белем алыу, камиллашыу йәһәтенән интернет, һис шикһеҙ, бик кәрәкле. Бөтә һорауға ла яуап табып була унда. Тик шулай ҙа файҙалы мәғлүмәт менән бергә хәүефлеһенә лә эйә булаһың. Мәҫәлән, унда үҙ-үҙен үлтерергә теләүселәр, наркомандар клубтары бар, порнография видеоматериалдары ла етерлек. Урамға сыҡмайынса ла енәйәт ҡорбаны йәки енәйәтсе булырға мөмкин.

Шуныһы ҡыуаныслы: күптән түгел Дәүләт Думаһы Рәсәйҙә домен һәм сайттарҙың берҙәм реестрын булдырыу тураһында закон ҡабул итте. Унда балалар һәм үсмерҙәр өсөн хәүефле мәғлүмәттәре булған сайттарҙың, биттәрҙең исемлеген булдырыу күҙаллана. Бында һүҙ, тәү сиратта, балалар порнографияһы, үҙ-үҙенде үлтереү, наркотик матдә яһау ысулдары тураһында бара, шулай уҡ милләт-ара ыҙғыш тыуҙырыу, һуғышты пропагандалау тураһында мәғлүмәттәр ҙә әҙәрләкләнәсәк. Был ҡанун атай-әсәйҙәргә бөтә донъя селтәрендә сәйәхәт итергә яратҡан балаларын хәүефле мәғлүмәттән, киберенәйәтселектән һаҡларға ярҙам итергә тейеш, тип ышанайыҡ.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ТӘБИҒӘТ СЕРҘӘРЕ*



# ЕҘТӨЙМӘЛЕК...

## йәки Зәйнулла исемле егеттең мутлығы тураһында хикәйәт

**Геоботаник тикшеренеүҙәр менән Урал аръяғы райондарында экспедицияларҙа йөрөгән саҡ. Бер көн ҡарабойҙай баҫыуы янында урынлашҡан умарталыҡ эргәһенә туҡталдыҡ. Умартасы Динислам ағай беҙҙе кисен яңы ғына һығылған бал менән ихлас һыйланы. Бал ҡорттарының быйылғы эше менән ҡәнәғәтләнеүен һөйләне. Үҙе үсемлектәр менән ҡыҙыҡһыныуын белдереп: "Аҙ ҡалды шул хәҙер тәбиғәттә бал бирерҙәй һәм башҡа файҙалы үсемлектәр. Бөтәһе лә химик ашламаларҙы, гербицидтарҙы самаһыҙ ҡулланыуҙан", - тип борсолоп ҡуйҙы. Ә еҙтөймәлек (пижма) үләне тураһында һүҙ сыҡҡас, ул иҫтә ҡалырлыҡ бер хикәйәт һөйләне.**

- Һуғышҡа тиклем булды был хәл, - тип башланы ул, хәйләкәр йылмайып. - Ошо тирәнең заманында киң билдәле Зәйнулла исемле егете "Минең кеүек изге йәнде бер ниндәй ҙә ҡандала ашамай", тигән хәбәр тарата. Халыҡ ысынлап та ышана. Зәйнулланың абруйы күҙ алдында үҫә. Әммә берҙән-бер көн ҡалала уҡып ҡайтҡан, үләндәр менән ҡыҙыҡһынған ошо ауылдың бер егете серҙе аса. Зәйнулла үҙе йоҡлаған түшәк тирәләй еҙтөймәлек үләнен йәйеп һалған икән...

Ысынлап та, был үсемлек составында бөжәктәр һәм башҡа умыртҡаһыҙҙар өсөн зарарлы матдә - пиретрин тупланыуы фәнгә билдәле. Шул уҡ ваҡытта был матдәнең йылы ҡанлы хайуандарға һәм кешеләргә бөтөнләй зарары юҡ. Ошо пиретринды күпләп алыу маҡсатында был үсемлектең "пижма розовая" тигән төрө плантацияларҙа сәсеп үҫтерелә.

Еҙтөймәлек (пижма обыкновенная - Tanacetum vulgare L.) Башҡортостандың барлыҡ райондарында ла үҫә. Уның асыҡ һары төҫтәге сәскәләре әллә ҡайҙан күренеп тора. Бына ошо һары сәскәләренә ҡарап, уны еҙтөймәлек тип йөрөтәләр ҙә инде. Ул бер төптән 8-10 һабаҡ сығарып, өйкөмләнеп үҫә. Июль-август айҙарында, хатта сентябрҙә лә уны сәскә атҡан килеш осратырға мөмкин. Бейеклеге 1-1,5 метрға етә. Еҙтөймәлек ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡарай.

Үсемлеккә яҡын килеү менән еҫен һиҙергә була. Тамырсаһы тура, ҡыҫҡа һәм күп башлы. Һабағы бер нисә, тура, бер аҙ йөнтәҫ. Япраҡтары алмаш-тилмәш, эллипс формаһында, остағы япраҡтарының һабы бар, ә түбәндәгеләре ултырма япраҡлы. Бөтә сәскәләре лә торба һымаҡ, асыҡ һары, ситтәгеләре - емешлек бағаналы, өс тешле таж япраҡлы. Урталағы сәскәләре ике енеслеләр, биш тешле таж япраҡлылар. Емеше - ярылы орлоҡса.

Был үсемлек тәбиғәт шарттарына бик тиҙ ярақлаша. Уны һыу буйҙарында ла, туғайҙарҙа ла, болондарҙа ла йыш осратырға мөмкин. Ул бигерәк тә Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарында киң таралған. Илеш, Яңауыл, Дүртөйлө, Борай, Балтас райондарында күпләп үҫә. Көньяҡ Уралдың Инйәр, Һаҡмар, Оло Ҡыҙыл, Кесе Ҡыҙыл йылғалары туғайҙарында еҙтөймәлек өйкөмләнеп үҫә. Уны ҡайһы берҙә ҡыр миләше тип тә атайҙар. Сөнки уның япраҡтарының урынлашыуы бер аҙ миләш ағасын хәтерләтә.

Еҙтөймәлек дарыу үләне булараҡ бик әһәмиәтле. Был маҡсатта уның кәрзинкә булып урынлашҡан, хас еҙ төймәләргә оҡшаған лимондай һары сәскәләрен файҙаланалар. Үсемлектең составында эфир майҙары, флавоноидтар, алкалоидтар, органик кислоталар, ыҫмалалар, буяусы матдәләр, А витамины, каротин бар.

Иҫендә тот. Йәй көнө походтарға сыҡҡанда еҙтөймәлекте ҡулығыҙға ыуығыҙ - камфара еҫен һиҙерһегеҙ. Уны битегеҙгә, муйыныңыҙға һөртөгөҙ - һеҙгә серәкәйҙәр, ләпәкәйҙәр яҡын да килмәҫ, сөнки еҙтөймәлек еҫен серәкәй, себен, көйә һәм ҡандалалар яратмай.

Еҙтөймәлектең составында эфир майҙарының күп булыуы уның фитонцид активлығын арттыра. Мәҫәлән, еҙтөймәлектең сәскәләрен яңы һуйылған ит тирәләй һибеп һалһаң, ит оҙаҡ һаҡлана, сөнки себендәр еҙтөймәлектең еҫен яратмай һәм итҡә ҡунмай.

**Сәфәргәлә ЙӘНТҮРИН,**
**биология фәндәре докторы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Оҙаҡ йәшәү серҙәре

### Аҙыҡты дөрөҫ итеп сәйнәү мөһимлеге

Алда әйтелеүенсә, аҙыҡты эшкәртеү процесында бик күп энергия исраф ителә, шуға күрә, был процесс ни тиклем енелерәк үтһә, беҙ башҡа эштәргә шул тиклем күберәк энергиябыҙҙы һаҡлап ҡала алаҫаҡбыҙ. Аҙыҡты дөрөҫ итеп һәм яйлап сәйнәү бик әһәмиәтле булып та күренмәҫ, бәлки, әммә ул ныҡлы сәләмәтлеккә, дәрткә эйә булыуҙың, һәр саҡ йәш ҡалыуҙың бер талабы.

Ҡайһы бер кешеләр гел ҡайҙалыр ашыға һәм аҙыкты яртылаш ҡына сәйнәп йота. Әммә ашҡаҙанға барып әләгер алдынан аҙыҡ ауыҙҙа эшкәртелергә тейеш. Юҡһа, ул ашҡаҙанда оҙаҡҡа "тукталасаҡ". Ә инде яҡшылап сәйнәлгәндә ул юлын иркен дауам итәсәк һәм организм тарафынан яҡшы үҙләштереләсәк. Әгәр аҙыҡ яҡшы сәйнәлмәһә, аҙыҡ эшкәртеү процесына энергия күп сарыф ителәсәк һәм аҙыкты үҙләштереүгә организмдың башҡа мөһим ихтыяждарына кәрәкле бик күп тормош көсө алынасаҡ.

Дөрөҫ сәйнәлгән аҙыкты организм еңел үҙләштерә, тимәк, күп ашау ҙа талап ителмәй. Йәғни, дөрөҫ итеп сәйнәү процесында һеҙ рационығыҙҙы кәметә, шул уҡ ваҡытта быға тиклемгегә ҡарағанда сәләмәтерәк була алаһығыҙ. Хәҙерге йәмғиәттә кешеләр талап ителгәндән артығыраҡ ашай. Ә оҙаҡ йәшәү өсөн сифатлы аҙыкты аҙ күләмдә ашарға кәрәк, ә киреһенсә түгел. Юҡҡа ғына Бенджамин Франклин: "Ғүмерегеҙҙе оҙайтырға теләһәгеҙ, тәшкә ашығыҙҙың күләмен ҡыҫҡартығыҙ", - тимәгәндер.

### Оҙаҡ йәшәүҙең тағы бер сере: үҙегеҙҙе ҡарт тип иҫәпләүҙән тыйылығыҙ

Жан-Жак Руссо: "Кәсһеҙ тән мейене ҡартайта", - тип яҙған. Ныҡлы сәләмәтлеккә эйә булыу һәм ҡартайыу процесын туҡтатыу өсөн һеҙ ҡартлыҡтың тәнегеҙгә үтеп инеүенә рөхсәт бирергә тейеш түгелһегеҙ. Үҙегеҙҙе ҡарттарса тотмағыҙ, ололарҙың ғәҙәттәрен үҙләштерергә ашыҡмағыҙ. Йәштәрсә йәшәү рәүеше йәшлегегеҙҙе һаҡларға ярҙам итер. Ғәмәлдә һеҙ үҙегеҙҙе ни тиклем ҡарт тип һанайһығыҙ, шул тиклем ҡартһығыҙ. Оҙаҡ йәшәүҙең сере дәрт, ҡәнәғәтлек, энтузиазм менән йәшәп, йәшерәк булып ҡалыуҙа.

Тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: ологаа барған һайын аҡыл һәм физик көстөң бөтә барыуы тураһындағы фекер "үҙенән-үҙе тормошҡа ашҡан күрәҙәлек" булып тора. Күнеле йәш булғандарҙың күбеһенең проблемаларҙан ҡасмайынса әүҙем тормош алып барғанын, ҡартайыу процесын тотҡарлауын раҫларға мөмкин. Бигерәк тә йәндең һығылмалығын һәм дәртен һаҡларға кәрәк. Көн һайын кроссвордтар сисеү, сит телдәрҙе өйрәнеү, төрлө күнекмәләргә йөрөү, аҡыллы китаптар уҡыу - өлкән йәштә лә аҡыл ҡеүәтен һаҡлап ҡалыуҙың иң һөҙөмтәле ысулы. Мейегеҙ йәш булып ҡалһын өсөн һеҙ унан нимә теләгәнегеҙҙе һорарға онотмағыҙ, ә ул һеҙ һорағанды мотлаҡ бирәсәк.

**Робин ШАРМА.**



## 3 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
